*Арзанға ғына һатып алып була торған "осһоҙ" кешеләр менән бер рәттән, алтын һәм гәүһәрҙәргә һатып алып булмай торған "ҡиммәтле" кешеләр ҙә була. Тап уларға бурыслыбыҙ тормошобоҙҙоң алға барыуы өсөн. Ямғыр һыуы менән тулы ауыр болоттар кеүек, был кешеләр ҙә юғары идеялар һәм изге маҡсаттарға тулышҡан. "Ҡиммәтле" кешеләр ҡайҙа ғына баҫмаһын (мөһим түгел, билдәле кешеләрме улар, әллә юҡмы), ул урында яҙ килә, бар нәмә сәскә ата башлай, донъя ҡош һайрауҙарына күмелә...*

***Абдулла Карни.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№5 (579)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Халыҡты зыялылар ҙа...**

Ҡоролтай ҙа яҡларға тейеш!



3

**Сәпкә тейгән һәр уҡ...**

тейҙермәгән йөҙ уҡтың һөҙөмтәһе



6

**Йәштәр ҡалаға китеп бөткәс...**



8-9 ауылдарҙы кем йәшәтер?

**Башҡорт бейеүен боҙмайыҡ!**

Фәйзи Ғәскәров та был талапты ҡәтғи ҡуйған



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## XXII ҡышҡы Олимпия уйындарының илебеҙҙә үткәрелеүе һеҙҙә ниндәй тойғолар уята, ниндәй спорт төрҙәре ярыштарын күҙәтеп барасаҡһығыҙ, кемдәр өсөн "янып-көйөргә" әҙерһегеҙ?

***Ғайса ХӘЛИТОВ, Бөрйән район хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте һәм спорт бүлеге начальнигы:*** 7 февралдә Сочи ҡалаһында асыласаҡ ҡышҡы Олимпия уйындары донъя кимәлендәге мөһим ваҡиға ул. Илебеҙҙең тышҡы һәм эске сәйәсәтен нығытыуҙа уның әһәмиәте бик ҙур, сөнки ул бөтә донъя спортсыларын ғына түгел, ә халыҡтарҙы ла бергә йыйып, дуҫлаштырып, уларҙы ҡунаҡсыл ҡабул итеп, илдең абруйын арттырыуға булышлыҡ итәсәк. Икенсенән, йәштәр, үҫмерҙәр менән эшләгән кеше буларак, улар өсөн Олимпия спортсыларының, бигерәк тә чемпиондарҙың сығыштары ни ҡәҙәре позитив өлгө, маҡсатҡа ынтылыштарында дәрт һәм сәм биреүсе көс икәненә иманым камил. Олимпиаданы үткәреүсе ил өсөн бер ваҡытта ла еңел булмайҙыр ул. Уның өсөн байтаҡ ҡына сығымдар сарыф ителеүе ҡайһы берәүҙәрҙә ризаһыҙлыҡ та тыуҙыра торғандыр, ләкин уны ойоштороуға бик күп инвесторҙар йәлеп ителеүен дә иҫтән сығарырға ярамай, бер бюджет аҡсаһына ғына үткәреп булмайҙыр бит инде бындай күләмле сараны.

Сочи бит баштан-аяҡ тип әйтерлек уникаль спорт ҡалаһына әүерелде, яңы спорт объекттары, заманса ҡоролмалар ҡалҡып сыҡты. Бындай инфраструктуралы ҡала аҙаҡтан барыбер сығымдарҙы кире ҡайтарасаҡ бит. Һәр хәлдә, унда спорт тормошо ҡайнап торасаҡ, тип уйлайым: төрлө кимәлдәге ярыштар үтәме, туристар, ял итеүселәр киләме - Сочи икенсе йәшлеген кисерер көндәр алда әле.

Спорттың дуҫлыҡ, туғанлыҡ бәйләнештәрен нығытыуҙағы роле тураһында әйткәйнем инде. Бының шулай булыуы ил буйлап үткән Олимпия уты эстафетаһында ла асыҡ күренде. Миңә, билдәле спортсылар менән бер рәттән, Олимпия ялҡынын Өфө урамдары буйлап йөрөтөү бәхете тейҙе. Сатнама һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, урам тулы халыҡ йыйылыуы, байрамса рух күңелемдә йылы тойғолар ғына ҡалдырҙы. Ошо сара ғына ла халыҡтың ҡышҡы Олимпиадаға ҡыҙыҡһыныуы ниндәй көслө булыуын күрһәтте. Эйе, түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ уны. Әйткәндәй, Олимпия уйындарын трансляциялауҙы ҡарар өсөн Өфөнән өр-яңы ҙур телевизор алып ҡайттым, үҙемдең спортсылар ғаиләһе менән һәр тапшырыуҙы ҡараясаҡбыҙ. Өлкән улым волейбол буйынса районның йыйылма командаһында уйнай, кесебеҙ - хоккейсы. Үҙем 30 йылдан ашыу физкультура һәм спорт өлкәһендә эшләйем. Еңел атлетика буйынса спорт мастерлығына кандидатмын, РСФСР чемпионатының көмөш миҙалын яулағанмын. Биатлон яратам. Әйткәндәй, беҙҙең яҡташ, Межгорьенан Ольга Вилухинаның көйәрмәндәре буласаҡбыҙ инде. Хоккейҙы ла ҡалдырмай ҡарап барырға тырышасаҡмын, сөнки хоккей республикала ғына түгел, Бөрйәндә лә бик популяр спорт төрө. Беҙҙең үҫмерҙәр район йыйылма командаһы республика Йәштәр хоккей лигаһының III зонаһында уйнай. Район ауылдарында 8 хоккей майҙансығы эшләй, шуларҙың икәүһе - район үҙәгендә. Ауылдарға сығып, ҡарап ҡайтҡаным бар: улар буш тормай, айырыуса кис, уҡыуҙан һуң боҙ майҙандары халыҡ менән шығырым тулы була.

Беҙҙең маҡсат- спортсылар әҙерләү генә түгел, иң беренсе сиратта, физкультура һәм спорттың массовыйлығына өлгәшеү. Яңыраҡ Иҫке Собханғолда заманса типовой Физкультура-һауыҡтырыу комплексы эшләй башланы, ике бассейны, тренажер залы, башҡа төрлө секциялары бар. Спорттың сәләмәтлекте, донъяға позитив мөнәсәбәтте нығытыусы йоғонтоло сара икәнлеген аңлаған кешеләр көндән-көн арта, шуға ҡыуанам.


**(Дауамы 2-се биттә).**




✓ *Кешене тыуған менән ҡотлап, бүләкте уның ата-әсәһенә биреү дөрөҫөрәктер. Милләткә, илгә, дуҫтарына ошо кешене бүләк иткән өсөн рәхмәт йөҙөнән бүләккә тик уның ата-әсәһе, туғандары лайыҡтыр.*



*ЯҢЫ РУБРИКА: "КИЛЕШМӘЙЕМ!"*

# БҮЛӘК КЕМГӘ ТЕЙЕШ?



**Беҙ үҙебеҙҙе уратып алған донъялағы күп кенә күренеш-хәлдәр-ҡағиҙәләр-ваҡиғалар менән килешеп бөтмәһәк тә, күп ваҡыт өндәшмәй ҡалабыҙ. Бында һүҙ оло сәйәсәт хаҡында ла бармай. Ә бит беҙ килешмәгән бик һүп һандағы ваҡ мәшәҡәттәрҙән оло уңайһыҙлыҡтар, оло бәләләр ҙә килеп тыуыусан. Үҙенде, башҡаларҙы позитивҡа көйләр өсөн иң беренсе нәүбәттә негатив менән килешмәүеңде лә белдереү фарыз тип уйланыла. Килешмәүҙе белдереү негатив менән көрәшеүҙе лә аңлатмай. Әйтәйек, аҡ менән ҡараны айырыр өсөн булһа ла кәрәктер был. Тап ошо хаҡта булыр тип уйлайбыҙ кемдәргәлер сәйер булып тойолор был яңы рубрикабыҙ. Уны башлап ебәреп, мин үҙем килешмәгән бер мәсьәлә тураһында яҙырға булдым.**

Мин, мәҫәлән, тыуған көндәрен үткәреүселәрҙе тәбрикләү һәм уларға бүләктәр биреүгә бөтөнләй ҡаршымын. Психофизиологтар тыуған көн үткәреүҙе үҙеңдең бер йәшкә ҡартайыуыңды рәсми рәүештә раҫлау, был хәлде үҙ-үҙеңә һәм башҡаларға иҫбат итеү тип белдерә. Был бик ҡурҡыныс, сөнки космоэнергет Рауфан Мортазин фекеренсә: "Нескә планда беҙ нимә уйлайбыҙ, нимәне күҙ алдына килтерәбеҙ, ул шундуҡ тормошҡа аша башлай..."

Бына бит нисек. Ә инде тыуған көнө менән ҡотлап, кешегә бүләк биреү тәүге эффектты көсәйтеүсе, аныҡлаусы, предмет менән иҫбат итеүсе сара. Тимәк, кешене тыуған көнө менән ни тиклем күберәк кеше ҡотлай һәм бүләк бирә, ул кеше шул тиклем тиҙерәк ҡартая һәм ғүмере ахырына яҡыная бара.

Минеңсә, кешене тыуған менән ҡотлап, бүләкте уның ата-әсәһенә биреү дөрөҫөрәктер. Милләткә, илгә, дуҫтарына ошо кешене бүләк иткән өсөн рәхмәт йөҙөнән бүләккә тик уның ата-әсәһе, улар иҫән булмаған хәлдә, уны тәрбиәүселәр, яҡындары, туғандары лайыҡтыр. Был осраҡта бүләк алыусыларҙа тыуған көнөн үткәргән кешенең артабанғы тормошо өсөн яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килер ине. Бындай иғтибар һәм бүләктәр шул яуаплылыҡты көсәйтер генә ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был мәсьәләгә һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ нисек, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ? Үҙегеҙҙең дә килешмәгән мәсьәләләрегеҙ хаҡында беҙгә яҙып ебәрергә онотмағыҙ. Һеҙ нимә менән һәм ни өсөн килешмәйһегеҙ?**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *XXII ҡышҡы Олимпия уйындарының илебеҙҙә үткәрелеүе һеҙҙә ниндәй тойғолар уята, ниндәй спорт төрҙәре ярыштарын күҙәтеп барасаҡһығыҙ, кемдәр өсөн "янып-көйөргә" әҙерһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Шатморт БИКЕМБӘТОВ, БР йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министры урынбаҫары:*** Бөтәбеҙгә лә мәғлүм булыуынса, Сочи ҡалаһында бик ҙур төҙөлөш эштәре алып барылды, һөҙөмтәлә иҫ китмәле ҙур, заманса спорт комплексы, улай ғына ла түгел, гигант спорт һәм һауыҡтырыу үҙәге- асылда, уникаль инфраструктуралы өр-яңы ҡала үҫеп сыҡты, тип әйтергә лә булалыр. Уның өсөн киткән сығымдар әкренләп үҙен аҡлаясаҡ, әлбиттә. Һәр хәлдә, шулай тип ышанғы килә, сөнки киләсәктә был комплекс бөтөн ил мәнфәғәтенә эшләйәсәк бит инде. Әлбиттә, уны Рәсәйҙең ысын ҡыш була торған урта төбәге тирәһендәрәк, мәҫәлән, Уралда, тағы ла аныҡлабыраҡ әйткәндә, иҫ киткес тәбиғәтле, тау саңғыһы үҫешкән Белоретта йә булмаһа Мәләүездә үткәреү бигерәк тә шәп булған булыр ине лә бит, сөнки ҡышҡы спорт өсөн Сочи ни генә тиһәң дә йылы яҡ. Ә шулай ҙа уның киләсәге бик ҙур: өмөтлө профессиональ спортсылар үҫтереү менән бер рәттән, ял һәм сәләмәтлек үҙәге булараҡ, үҙебеҙҙә лә, сит ил спортсылары һәм туристары араһында ла популярлыҡ менән файҙаланасаҡ.

Икенсе һорауға килгәндә, минә бигерәк тә хоккей, биатлон, саңғы ярыштары нык оҡшай, олимпиаданы мотлаҡ күҙәтеп барасаҡмын. Сочиға барып ҡараған тамашасы һәм көйәрмәндәргә ҡарағанда, бында, үҙебеҙҙә, телевидениенан күберәк тә күрергә булалыр, тием, сөнки төрлө каналдарҙан бер үк ваҡытҡа тап килгән ярыштарҙы ла күҙәтеп барыу мөмкинлеге бар. Олимпия уйындарының үҙ илебеҙҙә үткәрелеүе Рәсәй спортсыларына дәртләндергес этәргес булыр, тип уйлайым, ни генә тиһәң дә: үҙ өйөңдә - үҙ көйөң. Шуға күрә Башҡортостан вәкилдәренән дә тик ҡыуанысла һөҙөмтәләр генә көтөп ҡалабыҙ.

***Ирек ЗАРИПОВ, саңғы һәм биатлон буйынса дүрт тапҡыр Паралимпия чемпионы, Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Был көндәрҙә мин быйылғы Олимпия һәм Паралимпия уйындарының баш ҡалаһы Сочиҙамын. Күптән түгел был ҡалаға үткән Ҡышҡы уйындарҙы Ванкуверҙа сәләмләгән ике флаг - төп Олимпия символикаһы - самолет менән килтерелде. Быйылғы Уйындарҙың ойоштороу комитеты илселәре булараҡ, мин һәм шулай уҡ олимпия чемпионы Николай Крюков менән икәүләп ошо флагтарҙы Сочиға тапшырыу тантанаһында ҡатнаштыҡ. Беҙгә уларҙы флагштокка күтәреү бәхете тейҙе. Ә былай минең һәр көнөм ныҡышмалы күнекмәләр менән үтә, сөнки ошо Олимпия уйындарынан һуң уҡ, мартта, Паралимпия ярыштары башланып китәсәк. Ул ярайһы көсөргәнешле булмаҡсы: һуңғы йылдарҙа сит ил саңғысылары ла, беҙҙең Рәсәй йыйылма командаһы спортсылары ла яҡшы ғына әҙерлек кимәле күрһәтә. Хатта саңғысылар иле булмаған Япония ла Ҡышҡы уйындарҙа ҡатнашыу өсөн үҙ спортсылары әҙерлегенә бик күп көс һала икәне мәғлүм.

Олимпиаданың үҙ илебеҙҙә үтәсәге күңелде йылытып, яҡшы һөҙөмтәләргә ышанысты нығытып тора, әлбиттә. Был уйындар минең ҙур спорт менән хушлашыу йылы ла булыр, ахырыһы. Уйындарҙан һуң мин үҙемде сәйәсәткә бағышларға һәм илебеҙҙә спортты үҫтереүгә бөтә көсөмдө һалып, мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе күберәк спортҡа ылыҡтырырға, уларҙы спортта ла, тормошта ла фәҡәт еңеүҙәргә ынтылырға әйҙәп йәшәргә теләйем. Ә спорт менән шөғөлләнеү өсөн беҙҙә мөмкинлектәр бар. Айырыуса һуңғы йылдарҙа был йәһәттән яҡшы башланғыстарға юл асыла. Мәҫәлән, беҙҙең Башҡортостанда федераль маҡсатлы программа буйынса мөһабәт Олимпия үҙәге төҙөлөп ята. Ул асылып, эшләй башлаһа, беҙҙең спортсылар күнекмәләрҙе сит илдәрҙә түгел, ә үҙебеҙҙә үткәреү мөмкинлеге аласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** **яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, беҙҙең менән дуҫлыҡты дауам итеүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Был ярты йыллыҡта ла һеҙгә танһығығыҙҙы, ихтыяжығыҙҙы ҡандырыр, сәмләндерер, ғәмләндерер, рухландырыр мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән ниәттәбеҙ.**

Һеҙгә шундай мәғлүмәт тә еткерәбеҙ: **1 февралдән 31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙыла башлай алаһығыҙ.**

Ә инде эргә-тирәгеҙҙә "Киске Өфө"гә яҙылырға оноткан, өлгөрмәгән кешеләр булһа, уларға ошо һүҙҙәребеҙҙе тапшырығыҙ: гәзитебеҙгә 17 февралгә тиклем яҙылғандар уны марттан алдыра башлаясаҡ.

**Почтальондар иғтибарына еткерер һүҙҙәребеҙ ҙә бар.** 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған мәлдә уларға, кем дә кем иң күп (35 дананан башлап) "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә лайыҡ буласаҡ, тигән хәбәребеҙҙе еткергәйнек. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт. Әйткәндәй, бындай бәйгегә **Баймаҡ районы почтальондары һәм китапханасылары** йомғаҡ яһарға һәм беҙҙең бүләктәрҙе алып ҡыуанырға өлгөрҙө лә инде. Уларға тағы бер тапҡыр оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

**Тағы бер мәсьәлә:** яңы йылдың тәүге айында, ғинуарҙа, беҙҙең хөрмәтле дуҫтарыбыҙ - почта хеҙмәте ғәйебе менән ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙға баҫмабыҙ барып етмәне. Быны беҙ күп һанлы телефон шылтыратыуҙары аша беләбеҙ, хәлде асыҡларға, төҙәтергә, шылтыратыусыларға ярҙам итергә тырышабыҙ. Ләкин өйөнә гәзит килтермәһәләр ҙә, сабыр ғына көтөп ултырыусылар ҙа барҙыр, улар ҙа почта бүлексәләренә йә редакциябыҙға мөрәжәғәт итһен ине.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең бойороғо менән Альберт Мифтаховты Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләне, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Альберт Мифтахов 2012-2013 йылдарҙа - "Берҙәм Рәсәй" Бөтә Рәсәй сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе башҡарма комитеты етәксеһе булды. 2014 йылдың ғинуарынан әлегә тиклем Башҡортостан Республикаһы Президенты Секретариаты начальнигы булып эш башлағайны.

✓27 ғинуарҙа Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Коджаэли провинцияһының (Төркиә) "Ғәҙеллек һәм үҫеш партияһы" бүлексәһе рәйесе Махмут Дживелек менән осрашты. "Беҙ Башҡортостан Республикаһы Президенты менән технологиялар менән алмашыу, Башҡортостанға инвестициялар мәсьәләләре тураһында фекер алыштыҡ. Уртаҡ фекергә килеүебеҙгә һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙҙең дауам итеүенә ышанам", - тип белдерҙе Төркиә сәйәсмәне.

✓2013 йылда республикала дөйөм майҙаны 2484,6 мең квадрат метр тәшкил иткән 30,1 мең фатир файҙаланыуға тапшырылған, ул 2012 йыл кимәлен 6,9 процентҡа уҙған. Башҡортостанстаттың алдан биргән мәғлүмәттәренә ярашлы, торлаҡ төҙөү күләме буйынса республика 2013 йылда Волга буйы федераль округында беренселектә килә. Файҙаланыуға тапшырылған торлаҡтың (66,3 проценты) төп өлөшө шәхси төҙөүселәргә тура килә.

✓Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын биләүгә конкурста ҡатнашыу өсөн документтар ҡабул итеү тамамланды. Документтарын 10 кандидат тапшырҙы: Николай Бажин, Вячеслав Гаврилов, Рафиҡ Дусалиев, Сәид Закиров, Ринат Нәсибуллин, Николай Пучнин, Владимир Чернов, Илшат Шәфиғуллин, Марат Йосопов, Ирек Ялалов. Конкурс иғлан итеү тураһында ҡарар баш ҡала Советының сираттағы 28-се ултырышында Федераль законға, БР-ҙың Өфө ҡала округы уставына, БР-ҙың Өфө ҡала округы Хакимиәте башлығы вазифаһын биләүгә конкурс үткәреүҙең тәртибе тураһындағы положениеға ярашлы ҡабул ителде.

ИШАРА

# ХАЛЫҠТЫ ЗЫЯЛЫЛАР ҘА...

## Ҡоролтай ҙа яҡларға тейеш!



**Бөгөнгө кешелек доньяһы икһеҙ-сикһеҙ мәғлүмәт даръяһы менән уратып алынған. Был даръяла "балыҡ тотоу" ифрат еңел. Ауыңды һалыуың була, эреле-ваҡлы, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән табыш килеп тә эләгә. Яраҡлыларын һайлап ала ғына бел...**

Башҡорттоң борондан ҡалған "Күрше хаҡы - тәңре хаҡы", тигән бик аҡыллы мәҡәле бар. Ут күрше булған татар ҡәрҙәштәрҙең хәлен ТНВ каналынан даими ҡарап барам. Айырыуса "Татарҙар" программаһын.

Күптән түгел ошо программала татар зыялыһы Илдус Әмирхан әфәнде менән бик ҡыҙыҡлы әңгәмәнең шаһиты булдым. Илдус әфәнде мәғлүмәт даръяһына бик ентекле итеп татар милләтенең киләсәге тураһындағы фекерҙәрен оҙатты. Был "табыш" минең дә ауыма килеп эләкте, уны өҫтән-мөҫтән булһа ла барламаҡсымын.

Беренсенән, Илдус әфәнде татар зыялыларына, дөйөм алғанда, татар халҡына милләттең киләсәге тураһындағы уйҙары һәм пландары менән мөрәжәғәт итте. Икенсеһенән, ошо тапшырыуҙан һуң татарҙың, айырыуса зыялыларҙың ҡолағына, зиһененә һәм күңеленә "татар дәүләте", "татар цивилизацияһы", "татар Исламы", "татар милләтенең шәжәрәһе", "татарҙың милли идентификаторы" тигән өр-яңы төшөнсәләр юл алды. Өсөнсөнән, Илдус әфәнде милләттең киләсәге өс йүнәлештә хәстәрләнергә тейешлеге тураһында баҫым яһап атап үтте - дәүләт органдары, дини ойошмалар һәм мәғрифәтселек. Был әңгәмәлә мине иң ныҡ һоҡландырғаны шул булды: хәҙерге һынылыш кисергән заманда татар зыялыһының ябай, асыҡ һәм тура итеп (ҡурҡмайынса) милләтте хәстәрләп, уның киләсәген ҡурсалап сығыш яһауы.

"Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла" тигәндәй, был әңгәмәне мин дә ишеттем һәм уны үҙебеҙгә, башҡорттарға ла, ишара итеп ҡабул иттем. Шунан уйға баттым. Сөнки:

- беренсенән, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында беҙҙең зыялылар менән быныдай әңгәмәләр ойошторолғаны, милләткә туранан-тура мөрәжәғәт итеү, аңдарға ошондай кәңәш-фекер һалыу осраҡтары булғаны юҡ;

- икенсенән, башҡорттоң милли шәжәрәһе бар, уға кәм тигәндә 4 мең йыл - ул беҙҙең мәшһүр эпосыбыҙ "Урал батыр". Башҡорттар төрки халыҡтарҙан иң беренсе булып Ислам динен ҡабул итә. Быға дәлил- Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең VII быуатта уҡ башҡорттарға өс сәхәбәһен ебәреү тарихы, уларҙың икәүһенең Миәкә районының Нарыҫтау итәгендә ерләнеүе. Тимәк, "башҡорт Исламы" ла бар;

- өсөнсөнән, Башҡорт цивилизацияһы. Был цивилизацияны ҙурлап һәм ихтирамлап, бөйөк тарихсы, этнограф Сергей Руденко күптән "Башҡорттар" китабын яҙған. Беҙгә ауыр баҙар шарттарында яңы тарих һатып алыу, йә булмаһа, уны тыуҙырыу хәжәт түгел, тарихты яҡларға һәм һаҡларға ғына кәрәк. Башҡорт идентификаторы булып һәр башҡорт ырыуының сал быуаттарға барып тоташҡан шәжәрәһе тора;

-дүртенсенән, Илдус әфәнде менән тулыһынса килешмәй булмай. Милләттең рухлы, белемле, абруйлы, ҡурҡыу белмәгән зыялылары халыҡҡа йыш мөрәжәғәт итергә тейеш. Ошо мөһим һәм яуаплы йөктө етәкселәр, дин әһелдәре һәм мәғрифәтселәр бергә тартһа ине лә бит...

**Мәҫәлән, бөгөнгө шарттарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының йәшәйешебеҙҙә тотҡан урыны, милләткә рухи йоғонтоһо ифрат юғары булырға тейеш. Илдус әфәнде әйткән фекерҙәрҙе беҙ Ҡоролтайыбыҙ етәкселәренән дә ишетергә хаҡлыбыҙ. Айырыуса, Ҡоролтайҙың төбәк ойошмалары эште урындағы халыҡҡа яҡынайтһа, әүҙемләштерһә ине.**

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин йәшәгән бәрәкәтле Мәләүез ерендә район-ҡала башҡорттары ҡоролтайы бөтөнләй эшләмәй, башҡарма комитет ағзаларының йыйылып, кәңәш ҡорғаны юҡ, Аҡһаҡалдар, Ағинәйҙәр ҡорҙары төҙөлмәне, ауыл биләмәләрендә район ҡоролтайының тәүге ойошмалары барлыҡҡа килмәне. Был мәғлүмәтемде мин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәкселәренә йүнәлтәм. Башҡа район-ҡалаларҙа ла хәл беҙҙәге кеүек булһа, шәп түгел. Ҡоролтай кәрәк, уның халҡыбыҙға таяныс ролен үтәүе бөгөн бигерәк тә мөһим. Кешегә йәнде Аллаһы Тәғәлә бирһә, рухты иң беренсе сиратта ғаилә, мәктәп, милләттең зыялылары бирергә һәм һаҡларға тейеш бит.

**Тимер НИӘТШИН.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...

# МИЛЛИ ЙӨҘӨ БУЛҺЫН

**Миңә ғаиләм менән оҙаҡ йылдар Тажикстанда йәшәргә тура килде. Аҙаҡ үҙебеҙҙең Башҡортостанда "Полиэф"заводы эшләй башлағас, Благовещенға күсеп ҡайттыҡ. Баш ҡалабыҙ күңелемә бик яҡын, ныҡ яратам Өфөнө һәм бик тә йәшәргә теләр инем унда. Ләкин һөнәрем буйынса әлеге завод эшенә бәйле булғанлыҡтан, Благовещенда донъя ҡорҙоҡ.**

Бәхеткә күрә, Өфө беҙгә яҡын булғас, унда йыш барабыҙ: элегерәк, урындағы магазиндарҙа аҙыҡ-түлек, башҡа көндәлек кәрәк-яраҡ наҡыҫлығы заманында, Өфөгә барып, аҙнаға етерлек итеп төйәнеп ҡайта торған булһаҡ, хәҙер, шөкөр, үҙебеҙҙә лә магазиндар әйләнеп сыҡҡыһыҙ. Шуға күрә беҙ хәҙер баш ҡалабыҙға күберәк рухи ихтыяж, күңел саҡырыуы буйынса киләбеҙ. Әлбиттә, баҙар һәм аэропорт юлындағы яңы төҙөлгән Ашан, Мега, Метро, Касторама кеүек эре сауҙа комплекстары маршрутыбыҙҙан төшөп ҡалғаны юҡ, шулай ҙа хәҙер беҙҙең өсөн мәҙәни-ял саралары тәүге урында тора.

Ял көндәре, айырыуса йәйге осорҙа, улым Морат, киленем Гүзәлиә, ейәнем Рамаҙан-әл Тимербулат, ейәнсәрем Мәҙинә менән бергәләп машинаға тейәләбеҙ ҙә магнит кеүек үҙенә тартып торған гүзәл баш ҡалабыҙға елдерәбеҙ. Парктарҙы йөрөп сығабыҙ, балаларҙы һәр төрлө аттракциондарҙан айырып алырмын, тимә! "Өфө" универмагы ҡаршыһындағы "Семья" сауҙа-хеҙмәтләндереү комплексына инеп, фильмдар ҡарарға яратабыҙ, ҡайһы саҡтарҙа башҡа берәй концерт йә спектакль кеүек тамашаларҙы ла ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ.

Бынан алдараҡ мин үҙем һәр йәкшәмбе һайын Өфө мәсеттәренең береһенә йөрөп, 2 йыл буйы ислам дине дәрестәре алғайным, ғәрәпсә яҙырға, уҡырға өйрәндем, шуға күрә дин буйынса махсус әҙәбиәт эҙләп, Өфөнөң китап магазиндарын да айҡап сығам бер килгәндә. Бөтәһе лә һәйбәт: Өфө заманса мегаполисҡа әүерелә бара, урамдар таҙа, йәшеллек. Һуңғы йылдарҙа ҡала урамдарын төрлө төҫтәге сағыу сәскәләр биҙәй... Тик бер нәмәгә генә эс боша ла тора: ҡайҙа һуң Өфө башҡорттары? Урыҫ, татар, үзбәк, әрмән һәм башҡа телмәрҙәр араһында әсә телемдәге яғымлы, таныҡ өн һәм моңдарға ҡолаҡ һалам, ләкин бик һирәк ишетелә улар. Өфө урамында башҡортса һөйләшкән кешеләр юҡ, тип әйтерлек. Ирекһеҙҙән, баш ҡаламды ҡасандыр үҙем йәшәп киткән Тажикстан һәм Испания ҡалалары менән сағыштырам. Унда ҡалаларҙың милли колориты иң тәүҙә күҙ-ҡолаҡҡа салына, ә Өфөлә мин үҙемде ниндәйҙер "дөйөмләштерелгән", урта һыҙат ҡалаларының береһендә йөрөп ятам кеүек тә тойолоп китә...

Ҡаланы матурлау, йәшелләндереү темаһын дауам итеп, тағы ла шуны әйтер инем: әлбиттә, көньяҡтың климат шарттары урамдарҙа емеш ағастары, хуш еҫле роза гөлдәре үҫтерергә киң мөмкинлектәр бирә, шуға ла бындағы ҡалалар йыл әйләнәһенә тиерлек шау сәскәгә төрөнөп ултыра. Шуныһына ғәжәп иттем: унда бер кем дә үҫеп ултырған сәскәләргә теймәй, беҙҙәгеләр сирень, муйыл сәскәләрен ботарлаған кеүек ҡырағайлыҡ күрһәтмәй. Миҙгел үҙенсәлектәренә ҡарап, беҙҙә лә сәскәләрҙең төрлө сорттары үҫтерелһә ине. Ағас һәм ҡыуаҡтар ултыртылып тора ул, тик улар тағы ла күберәк булһын. Мәҫәлән, ниңә әле һауаны сафландырыу үҙенсәлегенә эйә шыршы, ҡарағас, ҡарағай, муйыл, балан, мышар, ҡайын кеүек ағастарҙы ла күпләп ултыртмаҫҡа? Юғиһә, нисәмә йылдар инде "Өфө йүкәләре" тип йырлай торғас, улар ҙа ҡартайыша, һирәгәйә бара түгелме? Ә тирәктәр яҙ һайын мамыҡ туҙҙырып, ҡала халҡына уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыуҙы дауам итә.

**Гөлгәүһәр СӨЛӘЙМӘНОВА.**
**Благовещен ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Сочи-2014" Паралимпия уты эстафетаһы Башҡортостандың баш ҡалаһынан 3 мартта үтәсәк. Эстафета юлының оҙонлоғо 4 км 290 метр тәшкил итәсәк. Әйткәндәй, Паралимпияла ҡатнашасаҡ Рәсәйҙең йыйылма командаһы составына Башҡортостандан биш спортсы индерелгән. Улар: Ирек Зарипов, Кирилл Михайлов, Азат Ҡарасурин, Надежда Андреева һәм Александр Давидович. Улар барыһы ла биатлон һәм саңғы ярыштарында ҡатнашасаҡ. Сочиҙа үтәсәк Паралимпия уйындары Олимпия уйындары тамамланғас ике аҙнанан, 7-14 мартта үтәсәк. Унда 45 илдән 1650 спортсы ҡатнашыуы көтөлә.

✓Өфөлә демографик үҫеш һаҡланыуы күҙәтелә, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды матбуғат конференцияһында баш ҡала хакимиәтенең иҡтисад идаралығы начальнигы Ольга Краснова. Уның билдәләүенсә, 2013 йылдың ғинуар-ноябрендә Өфөлә 15694 бала тыуған, был 2012 йыл менән сағыштырғанда 745 балаға күберәк. Халыҡтың тәбиғи артыуы 2013 йылдың 11 айында 4287 кеше тәшкил иткән. Сағыштырыу өсөн: 2012 йылдың ғинуар-ноябрендә был күрһәткес 3538 кеше булған.

✓Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһында "Башҡорт биҙәктәре" ҡатынҡыҙҙар клубы һәм Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы йәмәғәт ойошмаһы ойошторған башҡорт таҫтамалы байрамы үтте. Клуб залына ҡул менән сигелгән, етендән һәм кесерткәндән һуғылған башҡорт таҫтамалдары күргәҙмәһе урынлаштырылғайны. Ҡайһы бер туҡыма эштәренең йәше - 100 йылдан ашыу. Клуб етәксеһе Рәйсә Хужина, таҫтамалда кешеләр, башҡорт йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында иҫтәлек йәшерелгән, тип билдәләй.

✓Башҡортостанда Мәҙәниәт йылы сиктәрендә "Иң яҡшы 100 ваҡиға" конкурсы уҙғарыла. Унда республика һәм муниципаль мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениелары ҡатнаша ала. Ярыштың ойоштороусылары - БР Мәҙәниәт министрлығы һәм "Башҡортостандың мәҙәни донъяһы" интернет-порталы. Сараның төп бурыстары: Башҡортостан Республикаһында Мәҙәниәт йылында үткән иң яҡшы ваҡиғаларҙы асыҡлау һәм ижади башланғыстарҙы алға этәреү. Конкурстың беренсе турында эксперттар комиссияһы проекттарҙы һайлап аласаҡ. Йылдың сағыу һәм мөһим ваҡиғалары икенсе турҙа "Башҡортостандың мәҙәни донъяһы" порталында онлайн-тауыш биреү менән билдәләнәсәк.

**“Башинформ”дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҠАРТТАРҒА БЫЛ ДА ШАТЛЫҠ

**Ошо йылдың 1 февраленән ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы, шулай уҡ инвалидлыҡ һәм ҡараусыһын юғалтыу буйынса пенсиялар 6,5 процентҡа артасаҡ. Башҡортостан Республикаһында был сара 1 млн.10 мең кешегә ҡағыласаҡ. Өҫтәмәнең аныҡ суммаһы һәр кемдең - үҙенсә.**

Индексациялау шулай уҡ бер үк ваҡытта ике пенсия - ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы һәм инвалидлыҡ йәки ҡараусыһын юғалтыу буйынса дәүләт пенсияһы алыусыларға ла ҡағыла. 1 февралдән уларҙың ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсиялары артасаҡ. Хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшөн алыусы хаҡлы ялдағы 6 400 хәрбиҙең дә пенсияһы артасаҡ. Индексациялау һөҙөмтәһендә ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме Башҡортостанда 10 700 һумға етәсәк.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса идараһыһы Фоат Хантимеров һүҙҙәре буйынса, арттырылған пенсияларҙы түләү өсөн өҫтәмә рәүештә айына 700 миллион һум аҡса талап ителә. Был аҡса күсерелгән, һәм хаҡлы ялдағыларҙың бөтәһе лә 1 февралдән пенсияны яңы күләмдә ала башлаясаҡ. Пенсия фонды идаралығы хеҙмәт пенсияларын индексациялау буйынса бөтә тейешле эштәрҙе ғаризалар ҡабул итеп тормайынса ла башҡара ала.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# ЭШ УРЫНЫҢ ХӘҮЕФЛЕМЕ?

**Ғәмәлдәге законға ярашлы, 2014 йылдың 1 ғинуарынан зарарлы һәм хәүефле хеҙмәт шарттарында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр өсөн өҫтәмә страховка взностарын түләү тәртибенә үҙгәрештәр индерелде. Законға ярашлы, хеҙмәт шарттары хәүефле, зарарлы, рөхсәт ителгән һәм оптималь кластарға бүленә һәм өҫтәмә страховка взностары күләме хәүефле хеҙмәт шарттары класы өсөн - 8 процент, зарарлыға - 2-7, ҡалған икәүһенә - 0 процент тәшкил итә.**

Бынан тыш, 2013 йылдың 1 ғинуарынан ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһын ваҡытынан алда тәғәйенләү хоҡуғы биреүсе стажға эш осорҙары фәҡәт эш биреүсе тарафынан өҫтәмә страховка взностары күсерелгән шарттарҙа ғына иҫәпкә алына. Был эш урындарында хеҙмәт шарттары хәүефле йә зыянлы класҡа тап килгәндәргә ҡағыла.

"Хеҙмәт шарттарын махсус баһалау тураһында"ғы законға ярашлы, хеҙмәт шарттарына баһалау үткәрелгәнгә тиклем эш урындарын элегерәк ҡабул ителгән тәртип буйынса аттестациялаған һөҙөмтәләр ғәмәлдә була. Аттестациялау һөҙөмтәләре уларҙың күрһәтелгән ваҡыты бөткәнгә тиклем ғәмәлдә була, ләкин 2018 йылдың 31 декабренән дә оҙағыраҡҡа түгел. Өҫтәмә страховка взностарының күләмдәре 2009 йылғы Федераль закон нигеҙендә билдәләнә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АШЫҒЫС ХЕҘМӘТ КӘРӘКҺӘ...




**Рәсәйҙә ашығыс хеҙмәттәрҙең бөтә бәйләнеш операторҙары өсөн берҙәм, өс һанлы номерҙар индерелде. Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығының тейешле ҡарары 27 ғинуарҙа үҙ көсөнә инде.**

Хәҙер ярҙам һорап янғын хеҙмәтенә - 101, полицияға - 102, медицина ярҙамына - 103 һәм газ хеҙмәтенә 104 һандарына шылтыратырға кәрәк. Ҡыҫҡа 115 һандары буйынса электрон дәүләт хеҙмәттәре тураһында мәғлүмәт алырға була.

Шуны ла билдәләргә кәрәк: ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә алдан индерелгән берҙәм 112 һаны мөрәжәғәттәр ҡабул итеүен дауам итә. "Балаға хәүеф янай" телефон линияһы өсөн тәғәйенләнгән 122 һандары үҙгәрә, линия өсөн ике яңы номер - 121 һәм 123 бирелә.

Бөтә был номерҙарҙы барлыҡ Рәсәй операторҙарының уртаҡ телефон элемтәһенең теләһә ҡайһы селтәрендә ҡулланып була. Стационар телефондар өсөн 01, 02, 03 һәм 04 һандарын ҡулланыу әлегә һаҡлана.

Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығында билдәләүҙәренсә, номерҙарҙың яңы системаһына күсеү этаплап уҙғарыласаҡ.

# ТИҘЛЕК КӘМЕТЕЛДЕ




**Өфө - Аэропорт трассаһында яңы тиҙлек режимы индерелде. Хәрәкәттең иң ҙур тиҙлеге сәғәтенә 80 километрҙан 60 километрға тиклем кәметелде.**

"Бындай сара Дәүләт автоинспекцияһының кәңәшенә һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырыуға, юл-транспорт ваҡиғалары иҫәбен, уның һөҙөмтәһендә кешеләрҙең үлеү һәм йәрәхәтләнеү осраҡтарын кәметеүгә бәйле индерелде", - тип аңлатты лар баш ҡала округы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

РФ Эске эштәр министрлығы Өфө буйынса ЮХХДИ идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2013 йылда республиканың баш ҡалаһы юлдарында 111 кеше һәләк булды, өс меңдән ашыуы төрлө ауырлыҡта тән йәрәхәттәре алды.

# ҠЫЯР ӨЛГӨРҘӨ



**Өфө районының "Алексеевка" совхозында былтыр ноябрь аҙағында яңы технология буйынса ултыртылған ҡыярҙар өлгөрҙө.**

Яңы технологияның үҙенсәлеге шуға ҡайтып ҡала: ҡыяр орлоҡтары элекке йылдарҙағы кеүек махсус кассеттарға түгел, ә индивидуаль кубиктарға ултыртыла. Яңылыҡ үсентегә тиҙ үҫеү һәм 10-14-се көнөнә үк үҫереп ултыртыу өсөн күпкә уңайлыраҡ шарттар булдыра. "Алексеевка" совхозында ҡыярҙың "Карамболь", "Магнит", "Атлет" һәм "Картель" сорттарына өҫтөнлөк бирелгән. Теплица биналарының дөйөм күләме 30 гектар тәшкил итә, ул алтышар гектарлыҡ участкаларға бүленгән. Уларҙа һауа температураһы - 24-25 градус йылы, дымлылыҡ 70-75 процент тәшкил итә. Февралдә был майҙандарҙан "Алексеевка" совхозы дөйөм алғанда 25 тонна самаһы уңыш алырға планлаштыра, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

# УҠЫУСЫЛАРҒА - БАШҠОРТ БАЛЫ




**2014 йылдан алып Башҡортостанда мәктәп туҡланыуы рационына башҡорт балын индерәсәктәр. Бындай яңылыҡтың инициаторы - "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт бюджет учреждениеһы.**

"Башинформ" агентлығына бюджет учреждениеһы етәксеһе Әмир Ишемғолов хәбәр итеүенсә, был тәҡдим буйынса әле Башҡортостан Хөкүмәте тейешле ҡарар әҙерләй. Уҡыусыларҙың ниндәй категорияһы рационына башҡорт балы индереләсәге әлегә билдәһеҙ. Ул тик башланғыс синыф уҡыусыларына таратыласаҡмы, әллә уны аҙнаһына бер тапҡыр бөтә уҡыусыларға ла бирәсәктәрме, әле асыҡ түгел. Нисек кенә булмаһын, аллергия осрағынан һаҡланыр өсөн балалар балды уларҙың ата-әсәләре ризалығынан һуң ғына аласаҡ.

- Уҡыусылар өсөн бал 20 грамлыҡ һауыттарға тултырыласаҡ, - тип аңлатты Әмир Миннәхмәт улы. - Бындай фасовкалау өсөн мөмкинлектәребеҙ бар. Сәғәт эсендә 3,5 мең ошондай һауытты етештерә алабыҙ. Уҡыусылар туҡланыуы рационына бал индереү мәсьәләһе - бик көнүҙәк һәм хәҙер ул турала әүҙем фекер алышыу бара. Быға оҡшаш тәҡдим менән Башҡортостанда урынлашҡан хәрби частарға ла мөрәжәғәт итмәксебеҙ, сөнки бал уҡыусыларға ғына түгел, ә һалдаттарға ла кәрәк...

# СИРАТ КӘМЕГӘН



**2013 йылда Башҡортостанда балалар баҡсаларына сират ике тапҡырға кәмене. Әгәр 2012 йылда мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында өс йәштән ете йәшкә тиклем 29 меңдән ашыу бала сиратта торһа, хәҙер уларҙың һаны 14 мең тирәһе тороп ҡалды.**

БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2013 йылда яңы бина төҙөү, булғандарын кире ҡайтарыу, мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү учреждениеларында өҫтәмә урындар бүлеү, мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары ҡарамағында ғаилә тәрбиәһе төркөмдәре, ҡыҫҡа ваҡытта булыу урыны, мәктәп алдынан әҙерлек төркөмдәре булдырыу иҫәбенә планлаштырылған 11 080 урынына 15 050 балалар баҡсаһы урыны булдырылды.

Шулай уҡ республикала балалар баҡсаларына сиратты кәметеү буйынса "юл картаһы" эшләй, ул 2016 йылда урындар етмәүҙе тулыһынса бөтөрөүҙе күҙаллай. "Мәктәпкәсә белем биреү. Анализ һәм мониторинг" федераль сайты мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостан 2013 йылда мәктәпкәсә белем биреү төбәк системаһын модернизациялау практикаһы һәм "юл картаһы"н үтәү буйынса иң яҡшы төбәктәрҙең унауһы иҫәбенә инде.

**"БАШИНФОРМ"дан.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Был көндәрҙә Өфөлә Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәкмектәренең "Башҡортостандың мәҙәни баш ҡалаһы" мәҙәни ваҡиғалар марафоны старт алды һәм марафон символы Бөрө муниципаль районы хакимиәте башлығы Николай Хорошиловҡа тапшырылды. Республика мәҙәни ваҡиғалар марафоны үҙ юлын республиканың төньяҡ-көнбайыш төбәгенән башланы һәм йыл аҙағында Өфөлә тамамланасаҡ. БР-ҙа Мәҙәниәт йылы символы республиканың бөтә районДары һәм ҡалалары буйлап уҙасаҡ.

✓Өфөлә иғлан ителгән йыл һайын уҙғарыла торған "Яҙ һылыуы-2014" конкурсында ҡала предприятиелары һәм учреждениелары хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша ала. Өфө хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, һылыуҡайҙар конкурсы ике этапта үтә. Конкурста ҡатнашыусыларҙың тышҡы матурлығына ғына түгел, ә профессиональ эшмәкәрлегенә лә баһа биреләсәк. Һайлап алыу туры 13 февралдә үтәсәк. Финал шоуы 15 мартта Өфөнөң Орджоникидзе исемендәге Мәҙәниәт һарайында уҙа. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 10 февралгә тиклем cszm@mail.ru электрон почта адресына ебәреп була.

✓Сәнәғәт етештереүе индексы республикала 2013 йылда 102,3 процент тәшкил итте, ә дөйөм Рәсәй индексы 100,3 процент. Башҡортостанда сәнәғәт етештереүе уртаса Рәсәйҙекенә ҡарағанда юғарыраҡ темптар менән алты йыл дауамында үҫешә, тип билдәләй статистиктар. Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, Волга буйы федераль округында Башҡортостан был күрһәткес буйынса дүртенсе урынды биләй.

✓Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" гәзите "Талантлыны данлай "Башҡортостан" конкурсы башланыуы тураһында иғлан итте. Конкурстың маҡсаты - төбәгебеҙҙә һәм уның сигендә һирәк башҡарыу оҫталығына эйә булыусы йырсыларҙы, бейеүселәрҙе, музыканттарҙы, һәүәҫкәр композиторҙарҙы эҙләү. Конкурсҡа йомғаҡ яһау декабрҙең тәүге көндәренә планлаштырыла. Конкурс номинацияларында халыҡ һөйөүенә бүләк ҡаралған. Уның хужаһы гәзит сайтында "лайктар" иҫәбе буйынса билдәләнәсәк.

*АФАРИН!*

# УҠЫТЫУСЫЛАР...

## осталыҡҡа һынау тота

**Республикала төрлө өлкәлә "иң-иң"дәрәжә асыуға йүнәлтелгән конкурстар уҙғарылып тора. Уларҙа ҡатнашырға йөрьәт итеүселәр үҙен һынап ҡына ҡалмай, ә коллегалары менән осрашып, аралашып, тәжрибә уртаҡлашып, багажын ниндәйҙер кимәлдә тулыландырып ҡайта.**

Уҡытыусылар өсөн ойошторолған "Йыл уҡытыусыһы" бәйгеһе хәҙер инде үҙенең ҡоласын киң йәйеп ебәрһә, "Педагог-тикшеренеүсе" һәм "Уҡытыусы-мастер" исемдәренә уҙғарылған конкурс быйыл дүртенсе тапҡыр ғына үткәрелде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, төп маҡсаты һәләтле, ижади ҡарашлы педагогтарҙы асыҡлау, уларҙың уңышлы тәжрибәһен таратыу булған был сарала быйыл республиканың 31 муниципаль районынан һәм ҡала округынан башланғыс синыфтар, башҡорт, рус, инглиз, немец, татар телдәре, математика, физика, биология, химия, география, тарих, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, өҫтәмә белем биреү буйынса 63 уҡытыусы ҡатнашты. Ләкин баһалама ағзалары "иләге"нән икенсе турға барлығы 49 ғына кеше үтте. Уҙған аҙна һуңында ошо биш тиҫтә самаһы бәхетле һөнәрмән баһалама ағзалары иғтибарына ҡабаттан үҙ эштәрен, проекттарын тәҡдим итте. Ниндәйҙер кимәлдә был конкурс юғары уҡыу йортонда имтихан тапшырыуға оҡшап китһә, икенсе яҡтан, совет рәссамы Ф. П. Решетниковтың "Тағы ла икеле" тигән картинаһын иҫкә төшөрҙө. Сөнки комиссия ағзалары һәр кемгә профессиональ һорауҙар биреп, ҡайһы бер эш авторҙарын ҡаушатты, шикләнергә лә, яуапһыҙ ҡалырға ла мәжбүр итте. Икенсе яҡтан, ҡайһы бер проекттарҙы баһалама ағзалары хатта: "Беҙҙең (Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты - **авт.**) эште яңғыҙығыҙ башҡарағыҙ!" - тип, юғары баһаланы. Был үҙе үк сығыш яһаусының өҫтөнлөгө күрһәткесе булды. Һөҙөмтәлә "Педагог-тикшеренеүсе" һәм "Уҡытыусы-мастер" педагогик исемдәре бирелеүгә 17-шәр уҡытыусы тәҡдим ителде. Һүҙ - конкурста ҡатнашыусыларға.

**Гүзәл Сәхибгәрәева, Күгәрсен районы 1-се Мораҡ урта дөйөм белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, дөйөм стажы - 32 йыл:** Рус мәктәбендә эшләйем. Үҙемдең эш тәжрибәмдә йомғаҡлап, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә модellәштереү ысулы ярҙамында уҡыусыларҙың универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу" темаһы буйынса проектым менән сығыш яһаным. Был тема өҫтөндә күптән эшләйем һәм һуңғы ваҡытта районда, республикала бик күп уңыштарым бар, район кимәлендә беренсе урындар булды, олимпиадаларҙа, конференцияларҙа еңеү яулайбыҙ.

Хәҙер бит балалар башҡорт телендә генә түгел, ғөмүмән, китап уҡырға яратмай. Шуға күрә төрлө алымдар ҡулланып, уларҙы ҡыҙыҡһындырырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, проектыма ярашлы, әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгән саҡта уның сюжетын, композицияһын, образдарын моделдәр, төрлө схемалар, Штейнберг системаһы, кластерҙар йәки хронологик канва ярҙамында аңлатам. Бөгөн темамды "Күргәҙмәлелек ярҙамында әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнеү" тип үҙгәртергә тәҡдим иттеләр. Артабан да ошо йүнәлештә эшләп, тәжрибәмде коллегаларым менән бүлешермен, тием.

**Рәсилә Ғәлимова, Учалы районы Миндәк ҡасабаһы дөйөм белем биреү мәктәбенең тарих уҡытыусыһы, эш стажы - 38 йыл:** 2008 йылдан "Минең тыуған төйәгем" тигән түңәрәк алып барам, музей эшенә тотоноп киттем. Уҡыусылар менән тикшеренеү эштәре яҙабыҙ. Эшемде бик яратам һәм, тормошта нимәлер үҙгәрә икән, уны һәйбәт итеп ҡабул итергә кәрәк, тигән принцип буйынса йәшәйем. Тәүге профессиям - психолог. 20 йыл психолог булып эшләгәндән һуң оптималлештереүгә эләктем. Хәҙер, әлдә эләккәнмен, тип ҡыуанам. Сөнки яңы офоҡтар асылды. Ауыл мәктәптәренән булһаҡ та ҡурҡып ятмайбыҙ, эштәребеҙҙе Рәсәй конкурстарына ебәреп, енеп сығабыҙ. Был беҙгә артабан үҫергә ҡанат-тар ҡуя. Балалар ҙа беҙ ойоштороған сараларға бик теләп йөрөй һәм был уларҙы музей эшенә ылыҡтырыуға ғына түгел, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыуға ла этәргес бирә. Конкурсҡа ныҡлы әҙерләнеп, көслө программа менән килдем, тип әйтә алам, сөнки баһалама ағзалары бик маҡтаны, Рәсәйгә ебәрерлек, тигәс, шул тиклем ҡанатланып киттем, балаларыма ҡайтып күренергә лә оят түгел.

**Әсгәт Әбдрәхимов, Күгәрсен районы Волостновка дөйөм белем биреү мәктәбенең хеҙмәт, рәсем, һыҙма дәрестәре уҡытыусыһы. Дөйөм стажы - 30 йыл:** Башҡорт дәүләт педагогия институтының художество-графика факультетын тамамлағандан һуң, 2004 йылдан алып районда рәсем төшөрөү буйынса мастер-класс тигән программа буйынса эш алып барам. Йәғни махсус белеме булмаған уҡытыусыларҙы рәсем төшөрөү ысулдарын, методикаһын ҡулланырға өйрәтеү, терминдар менән таныштырыу буйынса эшләйем. Сөнки һәр бала - рәссам, тиҙәр. Уларҙың талантын үҫтерергә белемле уҡытыусылар кәрәк. Минең районда ойошторған методик берләшмә курстарына бөтөнләй һүрәт төшөрөүгә һәләте булмаған уҡытыусылар ҙа, мәктәп директорҙары ла йөрөй. Баһалама ағзалары программамды ыңғай ҡабул итте һәм хатта мин 18 сәғәт дәрес алып барһам, улар уны 72 сәғәткәсә арттырып, киңәйтеп, Мәғарифты үҫтереү институтының белемде камиллаштырыу курстары итеп үткәреп, уҡып сығыусыларға махсус документ тапшырыу тәҡдимен яһаны. Республика уҡытыусыларына семинарҙар үткәрергә лә тәҡдим иттеләр.

**Венера Сәлимуллина, Кушнаренко районының Иҫке Ғүмәр дөйөм белем биреү мәктәбе директоры, дөйөм стажы - 40 йыл:** Мин директор булып эшләй башлағас ҡына уҡытыусылар өсөн мөмкинлектәр асылды ла китте. Һәр ваҡыт йәштәрҙе күтәрергә кәрәклегенә инана инем. Талантлы, теләге булған йәштәрҙе ҡанатландырып ебәрергә, ярҙам итергә кәрәк. Беренсе мәртәбә бындай ҙур конкурста ҡатнашырға мәктәбебеҙҙең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын алып килдем. Бик күп республика, Рәсәй конкурстарында ҡатнашабыҙ. Шәп уҡытыусыларыбыҙ бар, әммә бөгөн ауыл мәктәбен бер проблема борсой - балалар һаны аҙ. Шуға нисек тә мәктәбебеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға ине. Ошо йәһәттән яҡшы уҡыусыларҙы, уҡытыусыларҙы конкурстарҙа ҡатнаштырып, енеп, үҙебеҙҙең дә тауышты ишеттереп, белем усағының матди базаһын нығытып, һаҡлап ҡалырға ине, тигән ниәттән йөрөгән көн.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был конкурс үҙенә күрә педагогик тәжрибә майҙансығы ла булып тора. Заман көндән-көн үҙгәрә, яңынан-яңы технологиялар барлыҡҡа килә. Күп уҡытыусылар шул технологиялар менән ҡоралланып, белем биреүҙең һөҙөмтәлелеген, сифатын күтәрә. Ә был БР Мәғариф министрлығы, БР Мәғарифты үҫтереү институты өсөн дә кәрәк. Сөнки алдынғы педагогик тәжрибә хаҡында һүҙ китә. Ә алдынғы педагогик тәжрибә өйрәнелергә тейеш, ул булырға тейеш.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*АСЫҠЛАЙЫҠ!*

# КЕМДЕ ҠЫҪАЛАР?

**"Төрлө баҫмаларҙа, интернет киңлектәрендә "Башҡортостанда рус теле дәрестәрен ҡыҫалар!" ти ҙә яҙалар. Кем ҡыҫа, башҡорт теле ҡыҫырыҡлаймы әллә был дәрестәрҙе? Шулай булмаһа ярай ҙа! Ә шулай ҙа аңлатып үтегеҙ әле: Өфө мәктәптәрендә, мәҫәлән, башҡорт телен нисә сәғәт, рус телен нисә сәғәт уҡыталар?"**

**Әлнисә Сәмиғуллина. Өфө ҡалаһы.**

**Шамил ХАРИСОВ, Өфө ҡала округы хакимиәте мәғариф идаралағының әйҙәүсе инспекторы:** "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" БР Законына ярашлы, уҡыу пландарын ҡабул итеүҙә ата-әсәләр комитеты һәм мәктәп администрацияһы хәл итә. Мәғлүм булыуынса, бөгөн дүрт төрлө уҡыу планы бар. Әммә милли төбәк булараҡ, беҙгә уның тап икенсеһе тура килә. Сөнки беренсе планда туған телдәр генә бар, дәүләт телдәре юҡ, төбәк компонентына ваҡыт әҙ ҡалдырылған. Шуға ҡала мәғариф идаралығы икенсе планға өҫтөнлөк бирә. Унда дәүләт телдәрен уҡытыу ҙа, туған телдәрҙе уҡытыу ҙа бар, йәғни төбәк компонентына сәғәттәр һаны күберәк бүленгән, тигеҙ шарттар булдырылған.

Ғөмүмән алғанда, ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ 2-9-сы синыфтар аҙнаһына 2 сәғәтлек программа менән, ә 10-11-се кластар 1-2 сәғәт уҡый. Әгәр ҙә 10-11-се класта туған тел уҡытыу ойошторолған икән, аҙнаһына бер сәғәтлек программа буйынса уҡытыла. Әгәр ҙә туған тел уҡытыу ойошторолмаған икән, ҡайһы бер мәктәптәр бер сәғәт, ҡайһы берҙәре икешәр сәғәт уҡыта.

Дәүләт теле булараҡ рус теле төрлө кластарҙа төрлөсә уҡытыла һәм ул дәүләт рус теле дәресе тип түгел, рус теле һәм әҙәбиәте дәресе тип атала. Ҡайһы бер кластарҙа ул дүрт сәғәт, ҡайһыларында бишәр сәғәт уҡытыла. Өлкән синыфтарҙа ике-өс сәғәткәсә кәмей. 1-11-се кластарҙа дәүләт теле булараҡ уҡығанда, Рәсәйҙә раҫланған уҡыу планына ярашлы, дәрестәр уларҙың программалары буйынса уҡытыла. Ә туған тел булараҡ рус телен Башҡортостанда үҙебеҙҙең ғалимдарыбыҙ әҙерләгән программа буйынса уҡытабыҙ. Бында, нигеҙҙә, матур һөйләргә, дөрөҫ яҙырға өйрәнеүгә һ.б. баҫым яһала. Туған тел булараҡ уҡытылғанда, милли төркөмдәр нисә сәғәт уҡыһа, рус балалары ла шунса - 1-се кластан 11-се класҡа тиклем 2-3 сәғәт уҡый. Мәҫәлән, бер мәктәптә өс параллель синыф бар икән, ти. Уларҙағы бер милләт балалары бер төркөмгә йыйылып, туған тел дәресенә инә. Бындай бүленеш мәктәп директорының бойороғо менән раҫлана. Башҡорт балалары башҡорт теле дәресенә инһә, татар милләтле балалар үҙ туған телен өйрәнә. Ҡалған балалар туған рус телен уҡый. Йәғни тигеҙ шарттарҙа туған телен өйрәнә, тип әйтергә мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыу алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йоҡоһоҙлоҡ

Йоҡлай алмай интегеүселәр өсөн түбәндәге дауалар ярҙамға килер:

❖ 2 балғалаҡ ҡомалаҡ тубырсығын 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға, томалап, 4 сәғәт тәнәтергә, шунан һөҙөргә. Йоҡларға ятыр алдынан эсергә.

❖ ваҡланған ҡомалаҡ тубырсығын араҡы йәки 5 градуслы спиртҡа һалып, ҡараңғы урында 2 аҙна тәнәтергә, һөҙөргә, һығып алырға. 5 тамсы тәнәтмәне ҡайнатып һыуытылған 1 ҡалаҡ һыуға ҡушып, көнөнә ике мәртәбә - көндеҙ ашағанда һәм кис йоҡлар алдынан эсергә.

❖ ҡомалаҡ мендәре яһап, баш аҫтына һалып йоҡларға ла була.

### Тәндә - сүп

❖ Бигерәк тә бала-саға яфалана быңың менән. Сүп ҡаҙалған урынға өлгөргән, һорғолт таптары күренгән банандың ҡабығын эске яғы менән бәйләп ятырға, иртәнсәккә сүп үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға.

Ә үксә күҫек ҡалын тиреле ергә ҡаҙалһа, банан ҡабығын ике көн бәйләп ятырға кәрәк булыр.

### Бауыр

Бауырҙы йышыраҡ дауалайыҡ, кукурузды онотмайыҡ, тип әйткем килә гәзит уҡыусыларға.

❖ 100 гр кукуруз мыйыҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыуытырға һәм тәнәтергә. Тәнәтмәне бауыр ауыртҡанда, үт юлдары һәм үт ҡыуығы сирләгәндә һәр 3-4 сәғәт һайын 1-3 ҡалаҡ эсергә.

❖ 6 ҡалаҡ балды 4 ҡалаҡ зәйтүн майы һәм 2 ҡалаҡ лимон һуты менән ҡушып болғатырға, ҡатнашманы бауыр һәм үт ҡыуығы ауыртҡан саҡта 1 ҡалаҡ ҡулланырға.

### Гипертония

❖ Халыҡ медицинаһында гипертония ауырыуҙарының енел формаларында ҡыҙыл көртмәленең һутын ҡулланалар.

❖ Ирәүән үләнен беренсе дәрәжәләге гипертония ваҡытында тәнәтмә, порошок формаһында ҡулланалар.

❖ Юғары ҡан баҫымы йонсотһа, тышы менән бешерелгән "мундирлы" картуфты ҡабығы менән ашағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Айлыҡ пландарҙан тыш, киләһе 3 йылға аҙымлап тормошҡа ашырыла торған план да төҙөнөм. Унда финанстар, матди һәм рухи ҡиммәттәр, китаптар, блогтарҙы үҫтереү, эшлекле мөнәсәбәттәр теркәлгән.*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Һыу зәхмәтен имләү

**Ауырыу эйәртмәҫ өсөн им-том.** Ен, зәхмәт менән бәйле ауырыуҙар төрлө ерҙән һуғыла икән. Ул зыяратта ла һуғылырға мөмкин. Шуға зыяратҡа барғанда, ҡәбергә көртә ҡуйғанда, ауырыу эйәртмәҫ өсөн ошондай доға ҡылғандар:

*Ҡәберең нур булһын,*
*Иманың юлдаш булһын,*
*Алдың - үҙеңә.*
*Артың - беҙгә.*

**Мәйет һыуынан ауырыу.** Мәйетте йыуғас, һыуын кеше, мал йөрөмәй торған ергә түгеп, өҫтөнә "Бисмилла" тип һыныҡ һәнәкмә, балтамы, сөймө һалып, күмеп ҡуйырға кәрәк. Тимер нәмә һалмаһаң, мәйет һыуы эйәләнә. Эйәләгән мәйет һыуына кеше баҫһа, уға ауырыу - зәхмәт һуғыла, тиҙәр. Ундай ауырыуҙан кеше аяҡһыҙ ҡала.

**Сарпыу име.** Һыу түккән урынға бераҙ баҫһа, сарпыу була. Шуны имләү сарпыу ташлау, тиелә. Ауырыуҙың өҫтөндәге кейемен систерәләр, тауыҡ һуялар ҙа шуның ҡанына кейемен буяп, соҡорға ташлайҙар. Уны сарпыу ташлауҙы әбей алып китеп, соҡорға ташлай.

**Йығылып имгәнгәнгә им-том.** Берәйһе йығылып имгәнһә, "Сарпыу теле" тигән доға уҡығандар, шул доғаны яҙып, йығылған ергә күмгәндәр. "Сарпыу теле" доғаһын һәр саҡ үҙең менән алып йөрөргә кәрәк.

**Сарпыу теле.**

*- Ни булған?*
*- Сарпыу булған. Шуны имләйем.*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9, 10.*
*Бер - белекһеҙ булһын.*
*2, 3 - осһон, китһен,*
*4, 5- биҙһен, китһен,*
*6, 7- елгә, ҡуҙға,*
*8, 9 - түң тупраҡҡа,*
*10 - уңға,*
*Имләп ҡайтмаһаң,*
*Миңә оят,*
*Имләп ҡайтһаң,*
*Һиңә оят,*
*Тфү, тфү, тфү,*
*Минең телем түгел,*
*Ғәйшә, Фатима теле,*
*Тфү, тфү, тфү!*
*Име-томо шул булһын!*

**Зыяндаш ауырыуынан им-том.** Зыяндаш тип, быума һымаҡ, кешене быуып һала торған ауырыуға әйтәләр. Кеше зыяндаш булһа, муйыны боролоп ҡала. Берәйһенең балаһы үле тыуһа, зыяндаш булған, тиҙәр.

**Һөйәк, тырнаҡтар менән ыҫлау.** Айыуҙың тырнағын, һөйәген алалар. Кеше зыяндаш булһа, быуманан ауырыһа, уны шул һөйәк-тырнаҡтарҙы төтәтеп, ыҫлайҙар.

**"Бүре ауыҙы "аша үткәреү.** Бүренең ике иренен дә түңәрәкләп кенә ҡырҡып алалар ҙа киреп киптерәләр. Ҡорһаҡтағы бала зыяндаш булһа йә ауыр тыуһа, гөманлы ҡатынды "бүре ауыҙы" аша үткәрәләр.

**Үткәрмә аша үткәреү.** Зыяндаш баланы "ашай" тиҙәр. "Бүре ауыҙы" йә булмаһа доғалыҡ яҙылған үткәрмә бетеү ҡулланалар. Ҡатынды шул үткәрмә аша үткәрәләр.

Бүре ауыҙынан үтһәң дә, доға үткәрмәнән үтһәң дә бер үк, тиҙәр.

**Сынаяҡҡа яҙыу яҙып эсереү.** Сынаяҡ тышына яҙып, зыяндаш һуғылған кешеләргә шуны сайҡап эсерәләр икән.

*Зыяндаш әпсене.*
*1, 2, 3, - өстән ҡайтһын,*
*Өс юл сатына китһен,*
*Тфү, тфү, тфү,*
*Китһен, бөтһен!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

---

*ӘЙҘӘ, ЙҮНСЕЛ БУЛАЙЫҠ!*

**Мин БДПУ-ның беренсе курсында "Иҡтисад һәм маркетинг" йүнәлеше буйынса уҡып йөрөйөм. Бер үк ваҡытта эшҡыуарлыҡ менән дә шөғөлләнәм. Бәлки, кирeһенсә, эшҡыуарлыҡҡа йәнәш уҡып та йөрөйөм, тип әйтергәләр. Үҙ эшем менән 9-сы синыфта шөғөлләнә башланым. Мәктәптә уҡығанда (Башҡорт республика лицей-интернатында белем алдым) төҫлө принтер һатып алып, заказдар ҡабул иттем. Уҡыу сәбәпле, заказдар үтәү менән ял көндәрендә генә шөғөлләнә инем. Шулай ҙа яҡшы ғына килем ала инем. Оҫтарған һайын яңы проекттар, яңы мөмкинлектәр асылды. Дизайн студияһы, сайттар эшләү, өй ҡуяндары буйынса ферма асыу (тормошҡа ашманы, әммә яҡын киләсәктә был проектҡа ҡайтасаҡмын әле), антикафе... Был тулы исемлек түгел әле.**

# СӘПКӘ ТЕЙГӘН ҺӘР УҠ...

## тейҙермәгән йөҙ уҡтың һөҙөмтәһе



Атай-әсәйемә, лицейыма рәхмәтлемен. Әсәйем бик кескәйҙән намыҫлылыҡ, тоғролоҡ төшөнсәләрен ҡаныма һеңдерҙе. Атайым менән бәләкәй саҡтан үк эшҡыуарлыҡ һуҡмаҡтарын тапаным. Кесе синыфтарҙа уҡығанда Магнитогорск ҡалаһына ит һатырға йөрөнөк, ит өҫтөнә пакет йәйеп йоҡлаған саҡтар ҙа булды. Ә лицей миндә көслө характер тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаны.

Бизнесҡа идея эҙләгәндә маҡсатым аҡса эшләү генә түгел ине. Мин кемдәргәлер ярҙам итергә теләнем. Дуҫтар менән яҡшы шарттарҙа ял итеү, тренинг, конференциялар, тыуған көндәр үткәреү, яҡшы өҫтәл уйындары, проектор, маркер таҡтаһы, компьютер һатып алыу, интернет бәйләнеше булдырыу өсөн, әлбиттә, аҡсалы шөғөл кәрәк ине. Мин үҙемдең антикафемды асып, ошо мохтажлыҡты бөтөрөргә тырыштым. Антикафе йәй дауамында эшләп килде. Әлеге ваҡытта ул ремонтта. Яҡын киләсәктә уның эшен яңынан йәйелдереп ебәрәсәкмен.

Дизайн студияһы минең даими эшләй торған йүнәлешем. Эштең йәйғә һалыныуы сәбәпле, был өлкәлә артыҡ ҡыйынлыҡтар кисермәйем. Яҡшы заказдар ҡабул итәбеҙ, клиенттар менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Унда программистар, дизайнерҙар эшләй. Үҙем дә был эштә камиллаша барам. Фотошопты, иллюстраторҙы ныҡлап өйрәндем. Колористика, каллиграфия, типографика, гөмүмән, дизайн буйынса бик күп китаптар уҡыным. Хәҙер уларҙы дөрөҫ итеп ғәмәлдә ҡулланыу мөһим. Антикафе менән дизайн студияһынан тыш, тағы бер нисә проект өҫтөндә эш алып барам. Уларҙың ҡайһы берҙәре эшләп китте лә инде.

Йәш кеше алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәргә тейеш. Сөнки һәр кеше хыялға бай булған кеүек, матди һәм рухи мөмкинлектәргә лә бай. Тик мөмкинлектәреңде эшкә ҡуша ғына бел. Маҡсаттарыңдың ҡараштарыңа тап килеүе илһамландыра. Мөмкинлектәрҙең үҙе килгәнен көтөп тормайынса, уларҙы үҙең булдырырға тырышыу ҙа фарыз. Алға барырға саҡырасаҡ маҡсаттар һайлау тормош алдындағы яуаплылыҡты арттырыу һәм һәр йәшәлгән көнөңдә энергия менән тултырыу өсөн иң яҡшы сара ул.

Эйе, бар эштәр ҙә көйлө генә бармай. Ҡайһы бер башлаған эшен оҙаҡҡа һуҙыла, кемдәрҙеңдер алабарманлығы арҡаһында юҡҡа сыға. Бәғзе ваҡыт уйлаған план-проекттың тормошҡа ашмай. Ә аҡса юғала. Ваҡыт олимпиадалағы атлет кеүек йүгерә, аңғармай ҙа ҡалаһың.

> **Әлеге ваҡытта минең төп проблемам - хаталарым. Хаталар бөтөнләй булмаҫҡа тейеш, тип әйтмәйем. Улар буласаҡ, хаталар ярҙамында беҙ үҫәбеҙ, камиллашабыҙ, һөҙөмтәгә өлгәшәбеҙ. Хатаны проблема тип әйтеп хаталаныу ярамай, был - тормоштоң үҙе. Эйе, ваҡыты менән ҡулдан бер нәмә лә килмәй. Ҡайһы бер саҡта бәләкәй генә кешенең бәләкәй генә һүҙе лә һиңә ҙур зыян килтерә. Ошондай мәлдәрҙә үҙеңдең кемлегеңде иҫтән сығармау, туҡтамайынса маҡсатыңа табан йүнәлеүең мөһим.**

Уратып алған кешеләрҙең нимә һөйләүе, уйлауы, һинең менән нисек аралашыуы мөһим түгел, нимә теләгәнеңде һәм ҡайҙа барғаныңды белеүең мөһим. Көнсөлдәр тағы ла ныҙыраҡ көнләшәсәк, тәгәрмәскә таяҡ тығасаҡ, көмһетергә тырышасаҡ. Көслө кешеләр тура юлға ебәрергә тырышасаҡ, ә көсһеҙҙәр һайлаған юлыңдан баш тартырға саҡырасаҡ. Нисек кенә булмаһын, үҙең булып ҡалыу, йөрәгеңде тыңлау һәм артабан атлау бик мөһим. Һәр саҡ, һәр ерҙә серек кешеләр артабан серейәсәк, ә һин сәскә атасаҡһың. Ошоларҙың барыһын да 18 йәштә аңлауыма ҡыуанам, юғиһә, ҡайһы бер кешеләр үҙҙәрен 30 йәштә лә бала кеүек хис итә. Аҡыл, физик, рухи, матди яҡтан уларҙың үҫеше ҡайҙалыр алыҫта туҡтап ҡалған була.

Ә мин киләсәктә лә нимә эшләйәсегемде беләм. Киләһе өс айға план төҙөгәнмен. Унда төрлө тормош аспекттары, тәжрибә, аҡса эшләү алымдары теркәлгән. Киләһе йылдарҙа нимәгә өлгәшергә теләгәнемде күрһәткән етди план ул. Ваҡыт тиҙ аға, бөтә нәмәгә өлгөрөргә, иң яҡшыһы булырға, билдәләгән курстан ситләшмәҫкә кәрәк. Беҙҙең мейебеҙ күҙ алдына ла килтереп булмаҫлыҡ нәмәләргә һәләтле, күҙ алдына ла килтереп булмаҫлыҡ уңыштарға өлгәшә алабыҙ, ләкин бик һирәктәр генә быға ышана - эшҡыуар менән эшҡыуар булмағандар араһында айырма ошонда.

Айлыҡ пландарҙан тыш, киләһе 3 йылға аҙымлап тормошҡа ашырыла торған план да төҙөнөм. Унда финанстар, матди һәм рухи ҡиммәттәр, китаптар, блогтарҙы үҫтереү, эшлекле мөнәсәбәттәр теркәлгән. Был пункттар сиратлап тормошҡа ашырыласаҡ. Беренсе пунктты эшләгәс кенә икенсе пунктҡа күсергә маҡсат ҡуйҙым. Иғтибарҙы бер нәмәгә йүнәлткәндә һәм һөҙөмтәне күҙ алдына килтергәндә генә уңыш буласаҡ. Был мөһим. Бөтә нәмәне уйлап, аҙымлап һәм яҡшы сифатта эшләргә кәрәк. Был күп ваҡытты аласаҡ. Ләкин бер кем дә тиҙ генә уңышҡа өлгәшә алмай.

Интернетта шәхси блогымды ла алып барам. Унда үҙемдең проекттар хаҡында һөйләйем, һөҙөмтәләремде теркәйем, пландарым менән уртаҡлашам. Даими уҡыусыларым бар. Блог тәү сиратта минең уңыштарымды күрһәтеп тороусы сығанаҡ. Минең маҡсатым - сифатлы контент төҙөү. Кешеләр унан үҙҙәренә файҙалы мәғлүмәт алырға тейеш. Әлбиттә, был йүнәлештә эшләйһе лә эшләйһе әле. Ләкин йүнәлештәрҙе билдәләнем дә инде. Блогыма ҡағылышлы икенсе маҡсатым - бизнес-блогтар буйынса Рәсәйҙә өс лидер исемлегенә эләгеү.

Йәш кеше, әлбиттә, кәңәшкә лә, ғәмәли һәм матди ярҙамға ла мохтаж. Күберәк һорарға кәрәк. "Һорарған кеше биш минут дауамында ахмаҡ күренә, һорамаған кеше ғүмер буйы ахмаҡ булып ҡала", тип әйтелә мәҡәлдә. Ни ҡәҙәр күберәк һорайһың, шул ҡәҙәр күберәк алаһың, әммә бының өсөн тәжрибә кәрәк. Мин дә Шарманың "Сәпкә тейгән һәр уҡ тейҙермәгән йөҙ уҡтың һөҙөмтәһе", тигән һүҙҙәрен тормошомда йыш ҡуллана башланым. Һорарға оялмайым. Һәр саҡ һөҙөмтә килтерәсәк нимәләр эҙләү юлындамын. Ыңғай яуапты алыуы ҡыйын, ләкин сәпкә тейгән бер уҡ йөҙ тапҡыр унда тейгеҙмәүҙең һөҙөмтәһе икәнен яҡшы беләм.

**Миңә ун һигеҙ йәш. Әле йәш булыуым - минең файҙаға. Ваҡыт үтәсәк, портфолио үҫәсәк, тәжрибә артасаҡ, блогым байыясаҡ. Ниндәй генә йәштә булма, ижад итеп, төҙөп, аҡса эшләп булғанын иҫбатлаясаҡмын. Перспективаларҙы, белемде һәм тәжрибәне матдилаштырасаҡмын. Беҙҙең һәр беребеҙҙә оло потенциал бар. Бары уны аңларға, маҡсатҡа ярашлы файҙаланырға ғына кәрәк.**

**Динислам БОҪҠОНОВ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# АҠҺАҠ ТИМЕРҘЕҢ...

## башҡорт ерҙәренән үтеүе

### Ниндәй маҡсат алып килә бында?

Бер нисә көндән Тоболға бар армия килә. Аттар ныҡ йонсоғанға күрә, бик күп кешеләр йылғаны кискәндә һәләк була. Бер нисә көндән Урҙа шикәйәтселәре ҡулға алына. Туҡтамыш хаҡында яңы мәғлүмәттәр алып, Тимер алға табан юл тота. Йылға-күлдәрҙе үтеп, уның ғәскәрҙәре 29 майҙа Яйыҡ (бөгөнгө Урал) йылғаһына килеп етә. Юл күрһәтеүсенең, йылға аша өс кисеү бар, тигән хәбәрен Тимер үҙенең әмирҙәренә һәм яугирҙарына: "Был өс кисеүҙең береһе буйынса ла үтергә һәм ышанырға ярамай. Сөнки дошман ҡаршыла, уның төрлө мөйөштәрҙә йәшенеп, беҙ йылға аша үткәндә һөжүм яһауы ихтимал. Дөрөҫ ҡарар шул: походҡа юл тотабыҙ, йылғаның үр яғына йүнәләбеҙ һәм Аллаға тәүәккәлләп, һыуға ташланабыҙ һәм уны кисеп үтәбеҙ". Һуңғараҡ Туҡтамыштың, ысынлап та, үрҙә әйтелгән өс кисеүҙә көтөп торғаны асыҡлана. Билдәле булыуынса, армия Һаҡмар йылғаһына 6 көндән барып етә һәм 4 июндә Ыҡ йылғаһын үтә. Яйыҡ менән Һаҡмар араһының яҡынса 25-30 километр булыуын иҫәпкә алып, ғәскәрҙәрҙең ошо йылғалар араһынан барғанын аңлауы ҡыйын түгел һәм һуңынан бер юл Һаҡмар менән Ыҡты кисеп үтә. Шулай итеп, уларҙың Яйыҡ аша йылғаны хәҙерге Сибай һәм Орск ҡалалары тәңгәлендә, ә Һаҡмар менән Ыҡ аша Ҡыуандыҡтан түбәнерәк урында үтеүҙәрен раҫларға була.

Кисеүҙән һуң шикәйәтселәр өс "тел"де ҡулға алып килтерә. "Тел"дәр Тимергә: "Туҡтамыш хан һеҙҙең килеүегеҙ хаҡында белмәй ине, әммә Едигейҙың һеҙҙән ҡасҡан ике нөгәре килеп, ханға һеҙҙең сүллектәге ҡомдан һәм урмандағы япраҡтан да күберәк яу менән килеүегеҙҙе әйтте. Был хәбәрҙән Туҡтамыш хандың күңеленә ут төштө, башынан быу күтәрелде һәм ул: "Мин шундай ике ғәскәр йыясаҡмын", - тип, төрлө тарафтарға белдереү күндерҙе, уң һәм һул ҡанаттарын йыйҙы, ә хәҙер, Ҡырҡ күле (күрәһең, элекке Ҡырҡ күле-Мең олоҫо урынлашҡан хәҙерге Дәүләкән районы хаҡында һүҙ бара.- **Авт.**) янында урынлашып, тағы ла ғәскәр артынан кешеләрен ебәрҙе (Һүҙ Аҙау, Һарай, Болғарҙан һуңлап килгән ғәскәрҙәр хаҡында бара.-**Авт.**)".

Ғәскәрҙәрен тулы әҙерлеккә килтереп, бөйөк әмир дошманына ҡаршы юл ала. Бер нисә көндән батҡыл урындар һәм



һаҙлыҡтар осрай. Беҙҙең ҡараш буйынса, был урындар Дим йылғаһының Бишбүләк, Миәкә, Әлшәй райондары территорияһындағы һыубаҫар туғайҙар. Тап ул ерҙәр ныҡ һаҙлыҡлы. Яңы "тел", Туҡтамыш, Тимерҙең аҙыҡ-түлеге аҙ булыуын ишетеп, сигенергә ҡарар итеүе хаҡында әйтә.

Бер нисә көндән урманлы урында беренсе алыш була. 40 нөгөрө менән ҡулға алынған, рус тарихында киң билдәле Мамайҙың мең башының улы үҙенең Һарайҙан килеүе хаҡында әйтә, ләкин һөйләшелгән урында, Ҡырҡ күле янында, хан ғәскәрҙәрен тапмай. Сығатайҙарҙың алғы отряды ҡабаттан һаҙлыҡ буйлап китә һәм ниндәйҙер тау һыртында яңы алыш башлана. Бер нисә көндән хандың арьергарды менән бәрелеш була. Тимер үҙенең улы Ғүмәр шәйехкә 20 меңлек бахадурҙар менән тиҙ генә дошманды ҡыуып етергә һәм юҡ итергә бойора.

Ниһайәт, һижрә буйынса 793 йылдың 15 рәжәбендә (1391 йылдың 19 июнендә) ике армия Һамар бөгөлөндә, Ҡондорса йылғаһы буйында, бөгөнгө Тольятти ҡалаһынан төньяҡ-көнсығыштараҡ урында осраша. Ярты миллион кеше ҡатнашҡан оло алыш була. Оло яу ҡыҙған мәлдә Едигейҙың Туҡтамыш ғәскәрендә булған ҡуштандары Аҡһаҡ Тимер яғына сыға, ә һатлыҡ йән байраҡ йөрөтөүсенең байраҡты ергә ташлауы сәбәпле, Туҡтамыш һуғышсылары араһында ығы-зығы башлана. Ханға тоғро ғәскәрҙәр тар-мар ителә, күпләп ҡырыла, 100 мең тирәһе урҙасы һәләк була. Ни өсөн Туҡтамыш аҙағына тиклем скифтарҙың боронғо тактикаһын тормошҡа ашырмай, ә үҙен Волгаға ҡыҫырға ирек бирә һәм шуның менән ғәскәрҙәренә сигенеү юлдарын киҫә? Күрәһең, ул быны үҙенең яугирҙары һуғыш яланынан ҡасмаһын өсөн эшләй. Дөйөм алғанда, был һуғыштан манғыт ырыуынан булған Едигей ныҡыраҡ ота. Оҙаҡламай ул Һарай тәхетенә үҙенең туғанын, Сыңғыҙхандың тоҡомонан булған Ҡотло Тимерҙе ултырта. Һәм йәш хаким исеменән Едигей Дәште Ҡыпсаҡ менән идара итә башлай. Тап шул осорҙа манғыт дәүләтенә - Нуғай Урҙаһына нигеҙ һалына.

### Хөсәйенбәк кәшәнәһе

Шишмә ҡасабаһы янында, Аҡзыяратта, Хөсәйенбәккә мавзолей бар. Күп быуаттар элек төҙөлгән был ҡорама Урал алды, Волга буйы, Ҡаҙағстан һәм Урта Азия мосолмандары электән зыярат ҡылған урын була. Тәү ҡарашҡа, башҡорт риүәйәттәрендә кәшәнәнең төҙөлөшөн Аҡһаҡ Тимергә ҡайтарып ҡалдырыу ғәжәп күренә. Крайҙы өйрәнеүсе Р.Г. Игнатьев шундай бер риүәйәт хаҡында бәйән итә: "Правитель Туркестана святой муж Хузя-Ахмед-Ясовей-хан послал в Башкирию к ногаям ученика своего Хусейн-бека. Здесь этот миссионер не только сделал ногаев добрыми мусульманами, но и обратил многих язычников. После этого Хусейн-бек ходил отсюда в Мекку и возвратясь поселился опять на озере Акзират и был главным имамом во всей Башкирии. После смерти он признан святым, на могиле его, будто, появился свет и многие мусульмане стали стекаться на поклонение гробу Хусейн-бека. Когда мимо здешняго места шел Тамерлан на погром России, то воздвиг этот мавзолей и сам прожил с ордою полгода. Тамерлан на этом месте лишился шести князей и велел похоронить их близ мавзолея Хусейн-бека; шесть надгробных камней послужили основанием кладбищу...", - тип яҙа.

Бөгөнгө көндә кәшәнә ташландыҡ хәлдә. Мөғжизә менән һаҡланып ҡалған яҙыуҙа, хажи Хөсәйен бәктең Төркөстандағы бөйөк Ғүмәр Тәрәсбәктең улы булыуы, был яҡтарға Төркөстандан килеүе, һижри календарь буйынса 740 йылда, йәғни 1339 йылда мәрхүм булыуы тураһында әйтелә. Тарихсылар менән рәсми булмаған аралашыуҙарҙа кәшәнәне төҙөүгә Урта Азия хакимының булышлығына шикләнеп ҡараған фекерҙәрҙе лә ишетергә тура килде. Йәнәһе, Әхмәт Йәсәүи менән Хөсәйенбәк төрлө замандарҙа йәшәгән. Ә Ҡаҙан ғалимы Г.В. Йосопов, ҡәбер өҫтөндәге ташты өйрәнеүенә ҡарамаҫтан, Хөсәйенбәктең болғар миссионеры булыуын һәм кәшәнәнең дә, миссионер үлгәс үк, болғар оҫталары тарафынан эшләнеүен раҫларға тырыша. Йосопов: "Кеше үлгәндән һуң күп ваҡыт үткәс, мәрхүм булған кеше хөрмәтенә һәм иҫтәлегенә мавзолейҙың төҙөлөүөн күҙ алдына килтереүе ҡыйын... Сөнки Көнсығышта ҡәбер өҫтө ҡоролмаларын кеше үлмәҫ борон төҙөү традицияһы киң таралған була", - тип яҙа Гүр Әмир мавзолейын миҫалға килтереп.

Быға яуап итеп шуны әйтергә була. Беренсенән, ҡәберҙәге яҙыуҙар Хөсәйенбәктең Төркөстандан килеүен раҫлай. Һәм был башҡорт риүәйәттәре менән дә тап килә. Икенсенән, Әхмәт Йәсәүи кәшәнәһе ул үлгәндән һуң ике быуат ярым ваҡыт үткәс төҙөлә. Әйткәндәй, был Урта быуаттарҙың архитектура ҡомартҡыларына инә һәм Аҡһаҡ Тимер тарафынан төҙөлә. 2003 йылда архитектура комплексы ЮНЕСКО-ға индерелә. Гүр Әмирҙе шулай уҡ Аҡһаҡ Тимер төҙөй. Әммә үҙе өсөн түгел, (ул үҙе атаһы янында Шәһризәбтә ерләнергә теләй), ә 1403 йылда иртә үлеп киткән яратҡан ейәне Мөхәммәт солтан өсөн. Ә үрҙә телгә алынған анахронизм хаҡында әйткәндә, суфыйсылыҡтың силсилә төшөнсәһен күҙ уңында тоторға кәрәк. Силсилә бер-береһенә бәйләнеп килгән рухи туғанлыҡ сылбыры, остаз-уҡыусы (мөршид-мөрид) тәртибендә төҙөлә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәргә барып тоташа. Шул уҡ ваҡытта, мөршид (остаз) һәм мөриттең (уҡыусы) бер заманда йәшәүҙәре лә мөһим түгел, сөнки улар араһында мистик бәйләнеш (илһам, төштәр формаһында) булыуы ла мөмкин.

Төркөстандан килгән башҡорт нәсихәтсеһенә иғтибар итеү өсөн Тимерҙең эске мотивтары булған микән? Беҙ быныҡ булыу мөмкинлеген инҡар итмәйбеҙ. Аҡһаҡ Тимер бар ғүмере буйы суфыйсылыҡ менән бәйле була. Суфый ауылы Хужа Илгәрҙә тыуа, Кеш дәрүиштәрендә (бөгөнгө Үзбәкстандағы Шәһрисәбеҙ ҡалаһы) белем ала, Сығатай дәүләтенең башлығы булғас та, суфыйҙар менән даими рәүештә кәңәшләшә, билдәле Бохара шәйеһе Әмир Ҡулал менән осраша. Үҙендә лә суфый шәйехтәренә хас сифаттар булыуы хаҡында яҙыла. Бөйөк хаким булып киткәс тә, Тимер үҙен дәрүиштәр мөхите менән уратып ала, уларға ярҙам итә, баҫып алған төбәктәрҙә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең нәҫеленә ҡараған кешеләргә һәм суфыйҙарға теймәй, уларҙы баҫып алыусы дәүләткә түләнә торған һалымдан азат итә. Ғөмүмән, Аҡһаҡ Тимер ҡапма-ҡаршылыҡлы шәхес була: унда ҡатылыҡ - миһырбанлыҡ менән, тәҡүәлек боҙоҡлоҡтар менән йәнәш була. Ул бөйөк баҫып алыусы ғына түгел, бөйөк төҙөүсе лә. Кәшәнә мәсьәләһенә ҡайтып ҡалғанда, Тимерҙең үҙе менән һуғышсыларҙы ғына түгел, таш оҫталарын да бергә алып йөрөүе бушҡа түгелдер.

**Салауат ТАЙМАҪОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 4-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Башҡорт күлдәгенә хас үҙенсәлек булып иҙеүендә төймәләрҙең булмауы тора. *Иҙеүбау (ыңырбау, ялғау, элдек)* муйын тирәһендәге махсус элмәккә кейҙерелгән йәки ныҡ итеп тегелеп ҡуйылған. Был үрелгән бауҙарҙың осона суҡтар бәйләнгән, улар ҡайһы берҙә алтын йәки көмөш еп ҡушып үрелгән һәм төрлө төҫтәге суҡтар менән биҙәлгән.

Башҡорттарға ғына хас тип һүрәтләнгән күлдәк бөтөн ерҙә лә осрай. Урал аръяғы, көньяҡ һәм үҙәк Башҡортостанда XX быуат башында уны барыһы ла кейгән. Төньяҡта, төньяҡ-көнбайышта, өлөшләтә көньяҡта уны бары тикололарҙа ғына күрергә мөмкин, йәштәр ҡыйыҡ яғалы, төймәле рус күлдәктәрен кейә. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһында ҡайтарма яғалы күлдәктәрҙе бөтөнләй кеймәгән урындар ҙа булған.

Рустарҙың ҡыйыҡ яғалы күлдәктәренән ҡырҡа айырылып торған башҡорт күлдәге бер ваҡытта ла билбау менән бәйләнмәгән һәм һәр ваҡыт салбарҙың өҫтөнән төшөрөлөп йөрөтөлгән.

Башҡорттар сәстәрен һәр саҡ ҡырған, ә һаҡал-мыйыҡтарын ауыҙ тирәһендә йолҡоп, ҡыҫҡартып тора. Ялтыр баштарын ҡаплау өсөн *түбәтәй, ҡолаҡсын, таҡыя* кейә. Түбәтәйҙәре, нигеҙҙә, ҡара йәки ҡыҙыл бәрхәттән була һәм бик йыш улар төрлөсә биҙәлә, ҡайһы берҙә көмөш еп менән ҡайыла.

Икенсе киң таралған баш кейеме - *бүрек* (ҡара буҫтау менән тышланған түңәрәк тире башлыҡ) түбәтәйҙең өҫтөнән кейелә (һүрәт).



Ул һарыҡ тиреһенән тегелеп, ҡондоҙ йәки төлкө тиреһе менән ҡаймалана, ҡайһы берҙә ҡаймаланмай ҙа. Был баш кейемен ҡышын да, йәйен дә кейгәндәр. Тик ҡышҡыһын ғына кейә торған *төлкө бүрек* (һүрәт) тә бик йыш осрай.



Ул ҡулбашҡа табан киңәйеп барған ялпаҡ цилиндр формаһында; тире ҡырпыуы төлкө тиреһенән, төбө буҫтауҙан йәки икенсе ҡара туҡыманан тегелгән. Эсе һарыҡ тиреһенән булған. Бындай баш кейемен башҡорттарҙа һәр ерҙә осратырға мөмкин. Бай башҡорттарҙың ҡама йәки ҡамсат бүреге лә төлкө бүреккә оҡшаған, әммә уның ҡырпыуы ҡама йәки ҡондоҙ тиреһенән эшләнгән.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ярым сферик баш кейеменең тағы бер төрө осрай: бәрәс тиреһенән тегелгән тире кәпәс. Кейеп йөрөгәндә уның ситтәре бер аҙ бөгөлөп, ул ҡаҙаҡтарҙың баш кейменә лә оҡшап китә.

М. Байышев һүҙҙәренә ҡарағанда, үҫәргәндәргә генә хас *илтер бүрек*, ҡара ҡаракүлдән тегелгән тәпәш баш кейемдәре башҡа ырыу башҡорттарында ла осрай, әммә улар башҡорттарҙа киң таралмаған. М. Байышевтың күҙәтеүҙәре ҡыҙыҡлы. Ул был баш кейемдәренән йәштәрҙең - ҡара, ололарҙың аҡ илтер бүрек кейеүен билдәләй.

*✓ Яҙ етһә, атаһының тракторы менән ер һөрә, йәйгеһен бесән эшләй, ҡыш етһә, бер ял йортон ярылған утын менән тәьмин итә. Һуңғыһын эшләр өсөн атаһы менән делянка алалар ҙа, утынды ярып, йөкләп, ташып һаталар.*



**Яңыраҡ өс егет - М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының тарих уҡытыусыһы Хәйҙәр ХАФИЗОВ, информатика уҡытыусыһы Тимур МӨХӘМӘТҠУЖИН һәм йәш фотограф Рафаэль ХӘМИТОВ араһында ҡыҙыҡлы бер бәхәс ҡубыуына шаһит булдыҡ. Әйткәндәй, был бәхәсте редакцияла сәй янында үҙебеҙ ойошторҙоҡ. Яңы ғына оло тормош юлына аяҡ баҫҡан егеттәрҙе шул берләштерә: улар өсөһө лә теге йәки был сәбәп арҡаһында яңыраҡ үҙ ауылдарын ҡалдырып, ҡалаға сығып китергә мәжбүр булған, өсөһө лә ауылдарҙы тергеҙергә теләй, уның киләсәге тураһында уйлана. Шулай итеп, бәхәс ошо һорауҙар тирәһендә барҙы: йәш белгестәрҙе ауылдарға ылыҡтырыуҙың ниндәй юлдарын тәҡдим итергә була? Ауылда йәштәр өсөн ниндәй уңайлы шарттар бар һәм ниндәйҙәрен әле булдырырға кәрәк? Әйҙәгеҙ, егеттәрҙе тыңлайыҡ.**

**▸ Тәүҙә һеҙҙе ауылдан ҡалаға күсергә этәргән сәбәптәр тураһында һөйләп үтһәгеҙсе. Йәнә, ҡалаға күсергә теләгегеҙҙе яҡындарығыҙ нисек ҡабул итте?**

**Тимур:** Әрменән ҡайтып төшкәндә минең алда "Кем булырға?" тигән һорау тормай ине. Үҙем һайлаған һөнәрем буйынса информатика уҡытыусыһы булырға күптән хәл иткәйнем инде. Өҫтәүенә, атайым да, әсәйем дә - уҡытыусылар. Шулай итеп, хәҙер минең алға "Ҡайҙан эш табырға?" тигән һорау килеп баҫты. "Бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына" тигәндәй, атайым директор булып эшләгән күрше Ҡолсора урта мәктәбендә информатика уҡытыусыһы декрет ялына киткән икән, уның урынына уҡыта башланым. Уҡытыусылар коллективының берҙәмлеге, уҡыусыларҙың ихласлығы, тыңлаусанлығы - барыһы ла мине был мәктәптәге эшкә башкөлләй ылыҡтырҙы. Мәктәп тормошона, коллективҡа уңышлы ғына ылығыуыма үҙем дә, туғандарым да ныҡ шат инек. Юғиһә, минең таныштар араһында уҡытыусы һөнәрен үҙләштереп тә, теге йәки был сәбәп арҡаһында хеҙмәт юлы башында уҡ педагогика һуҡмағынан ситкә ҡайырылыусылар күп булды...

Шулай итеп, беренсе уҡыу йылы аҙағына ла яҡынлашты. Мин: "Әлдә аҡыллы балалар менән эшләйем, эш хаҡым да ваҡытында бирелә, ата-әсәйгә лә йорт эштәрендә ярҙамым тейеп тора", - тип, икеле-микеле уйҙарҙы һәр саҡ ситкә ҡыуа килдем. Ә күңел тигәнең - ҡанатлы ҡош икән ул, саҡ ҡына ирек ҡуйҙыңмы - хыялдарға бирелә лә китә. Хыялдарҙы тотоп та, ситлеккә бикләп тә булмай. Уларҙы сикләргә лә ярамайҙыр. Ауыл тормошон, Ҡолсора мәктәбен ни тиклем генә яратһам да, бына шул хыял тигәнең баш ҡалала эш эҙләп ҡарау тураһында "ҡоторта" башланы. Атай ҙа: "Улым, тағы бер йылға бында ҡалһаң, бөтөнләй киткең килмәҫ, ауылға "батырһың". Мин бит күрәм - күңелең ҡалаға ынтыла, быйыл йәй Өфөгә барып, эш эҙләп ҡарамайһыңмы?" - тип ут өҫтөнә ялҡын өҫтәне. Шулай итеп, бесән мәле етеп килһә лә, ата-әсәйҙең фатихаһы менән ауылдан сығып китергә тура килде. Ауылдан китеүемдең тағы бер "елле" сәбәбе бар ине. Ул да булһа, ауылда ҡыҙҙар булмауы. Кемгәлер көлкө булып тойолһа ла, минең өсөн был да етди сәбәптәрҙең береһе ине.

Ауыл балаһы өсөн бесән ваҡытында ҡалала ятыуҙан да ауыры юҡ шул. Ни ауылға ҡайтып, бесән эшләшә, ни йүнле эш таба алмауым арҡаһында кәйефем арыу ғына ҡырылды. Ауылға ҡайтайым да ҡуяйым, тиһәм, атай менән әсәй: "Беҙҙең өсөн борсолма", - ти. Уларҙы ла аңларға була - улдары ҡала ерендә йәшәһен, профессиональ белемен камиллаштырһын, халҡыбыҙға тағы ла күберәк файҙа килтерһен, тигәндәрҙер, моғайын.

Ниһайәт, эш эҙләүем тураһында белдереүҙәр таратып йөрөй торғас, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында минең менән ҡыҙыҡһындылар - информатика һәм тормош хәүефһеҙлеге уҡытыусыһы итеп эшкә алдылар. Әйткәндәй, шәхси тормошомда ла елле үҙгәреш кисерҙем: күптән түгел райондаш бер һылыуҡай менән ғаилә лә ҡороп ебәрҙек.

**Рафаэль:** Әрменән ҡайтыуыма мине тыуған ерем Баймаҡ районы Темәс ауылында Тимурҙыҡы кеүек күңелгә ятҡан эш урыны, иркен йорт көтөп тормай ине шул. Ләкин мин дә тормош юлымды үҙемсә ҡорорға тырышам. Өфөгә сығып китеүемә, әлбиттә, әсәйем дә булышлыҡ итте. Берҙән-бер көндө миңә юллыҡ аҡса бирҙе лә: "Өфөлә эш табырға тырыш инде, улым", - тип, арҡамдан һөйҙө. Өфөләге иҡтисад лицейында уҡығас, дуҫтар, таныштар ҙа байтаҡ ине баш ҡалала. Өфөнөң ығы-зығылы тормошона ҡолас йәйеп ташландым да, тормошомдо үҙем теләгән йүнәлешкә бороп ебәрҙем. Фатирға түләп йәшәү ҙә мине ул тиклем борсоуға һалмай - иң мөһиме, фатирҙа уңайлыҡтар булһын. Үҙемде ижад кешеһе тип әйтә алам. Шуға фотоға төшөрөү серҙәрен өйрәнәм - әле бер фотостудияла эшләйем. Тәүге һорауға яуабым аңлашылалыр: ҡалаға килеүемдең беренсе сәбәбе - мине Өфөләге мөмкинлектәр, аралашыу даирәһе үҙенә тартты.

# ЙӘШТӘР ҠАЛАҒА

## ауылдарҙы кем

**Хәйҙәр:** Үҙем Әбйәлил районы Рауил ауылынан булам. Мине лә Өфө гел генә үҙенә тартты. Магнитогорск дәүләт университетының тарих факультетында уҡығанда ла, унан һуң ошо уҡ ҡаланың бер фирмаһында консультант булып эшләгән осорҙа ла интернетта "Башҡорт йәштәре Өфөлә теге сара үткәргән, был тамашала ҡатнашҡан", кеүегерәк яңылыҡтарҙы ҙур тулҡынланыу менән күҙәтеп бара инем. Шулай итеп, баш ҡалабыҙ менән яҡындан таныш булмаһам, алдан эш белешмәһәм дә, тоттом да Өфөгә юлландым. Өфөлә йәшәүсе таныш егеттәр менән бергә фатирға урынлашып, эш эҙләргә тотондом. Ситтән ҡарағанда Өфө "аҡ ҡаласлы" булып тойолһа ла, бында берәү ҙә ҡалас тотоп ҡаршы алмай икән: тәүҙә эш таба алмай интектем. Ахырҙа, Магнитогорскиҙа эшләгән фирманың Өфөләге филиалына эшкә урынлашып торорға тура килде. Шунан, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһына тарих уҡытыусыһы кәрәк, тигән хәбәр мине ошо уҡыу йортона алып килде.

Ауылдан ниңә сығып киттем һуң? Беҙҙең ауылда эш юҡ, тип әйтергә лә була. Колхоздан ҡалған биналарҙы фермерҙар, шәхси эшҡыуарҙар ҡуртымға алып, ҡаҙ, һыйыр көтә хәҙер. Биналарҙың яртыһын һүтеп алып бөтһәләр ҙә, яртыһы ултыра әле. Башлап ебәрһәң, берәй фермерлыҡ хужалығын асырға булыр ине. Ләкин был эш менән шөғөлләнеүе бик ауыр ҙа, тәжрибә лә талап итә. Йәштәрҙең күбеһе Магнитогорскиҙа уҡып йәки эшләп йөрөй. Кемдер ҡалала даими эшләй, бәғзеләре иһә, вахта менән йөрөп эшләүҙе ҡулайыраҡ күрә. Вахта менән йөрөп эшләүселәр, шулай уҡ ҡалаға, район үҙәгенә көн дә йөрөп эшләүселәр иҫәбенә ауылда йәштәр һаны әлегә кәмемәй. Вахта менән ситтә эшләүсе йәштәр ауылда йорт төҙөй. Беҙҙең ауыл йылына ике-өс йортҡа арта.

***Күп нәмә ололарҙың үҙҙәренә бәйле. Әгәр балаға өйөндә лә, мәктәптә лә: "Һиңә күҙ терәп торабыҙ, һин ауылда йәшәргә тейешһең", - тигән фекерҙе һеңдерһәң, бала бер ҡайҙа ла китмәйәсәк. Ә беҙҙең ауылдарҙа, киреһенсә: "Ауылда эске, ауылда ни бар, ҡалаға барығыҙ", - тип, йәш кеше аңында ауылдың бәҫен төшөрәләр. Әлбиттә, был махсус рәүештә эшләнмәйҙер инде, ә ауыл хужалығының бөлгөнлөккә төшөүе арҡаһында шулай килеп сығалыр. Ун туғыҙынсы быуатта Рәсәйҙә "Халыҡҡа барыу" тигән хәрәкәт киң йәйелдерелгән булған. Ниңә беҙҙең быуынға,мәҫәлән, шулай итмәҫкә? Берәй мәл, мәҫәлән, беҙҙең быуын 35-40 йәштәрҙә ҡалалағы фатирын һатып, ауылға ҡайтты ла, ауылда эшләй башланы икән, ти. Уларҙың балалары ла ошо уҡ ауылда төпләнергә бик мөмкин бит.***

**▸ "Йәш ғаилә" программаһы буйынса субсидия алып, ауылда ҡалған һәм бынамын тигән итеп йәшәп ятҡан таныштарығыҙ бармы?**

**Хәйҙәр:** "Йәш ғаилә" программаһы республикабыҙҙа 2003 йылдан башлап эшләп килә. Торлаҡ шарттарын яҡшыртыусылар иҫәбендә торған, ғаилә ағзаларының йәше 35-тән йәшерәк булған, үҙҙәренең дә бер аҙ аҡсаһы булған ғаиләләр был программа буйынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыу хоҡуғын ала. Ошо һәм бүтән талаптар үтәлгән саҡта дәүләт йәш ғаиләгә торлаҡтың уртаса хаҡының 30-35 процентын түләшә. Был программа буйынса дәүләт ярҙамы алған таныштарым әлегә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Минеңсә, был программа бик һүлпән тормошҡа ашырыла.

**Тимур:** Эйе, был программа тураһында минең дә ишеткәнем бар. Ниməһе ҡыҙыҡ - ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында йәштәр был программаға ынтылып бармай. Улар ипотека алыуҙы хуп күрә. Күптәр, ҡағыҙҙа булараҡ, кеше фатиры өсөн түләп, йә ата-әсә елкәһендә йәш ваҡытын уҙғара. Ана шул кеше фатирында йәшәгәнгә ҡарағанда, мөмкин тиклем үҙ торлағыңды булдырырға ынтылыу зарур.

**Рафаэль:** Кешегә ғүмергә бер тапҡыр ер алып, йорт төҙөү өсөн бушлай ағас бирәләр. Сиратҡа яҙылаһың да, көтөргә кәрәк. Ана шуны алырға тырышырға була. Тағы. Минең апайым еҙнәйем менән ауылда йәшәй. Еҙнәйем үҙе вахта менән Магнитогорск ҡалаһында эшләй, ауылда беренсе булып шиномонтаж асты. Ауылда ҡулланыусыһын табырлыҡ эш асыу ҙа файҙаға. Тик, мәҫәлән, апайымдың ҡала ерендә йәшәгеһе килә. Ә еҙнәй: "Юҡ, мин ауылда йәшәргә тейешмен", - тип, ҡырт киҫә. Тимәк, еҙнәй ата-әсәһенең тәрбиәһен ихтирам итә. Тығы бер шәп егет тураһында бәйән итмәксемен. Егет һәр саҡ үҙ йүнен үҙе күрергә тырыша. Ата-әсәһен дә ҡарай. Әйтәйек, аҙна һайын уҡып йөрөгән еренән ауылға ҡайтып, миҙгеленә ҡарап, төрлө эштәр эшләй: яҙ етһә, атаһының тракторы менән ер һөрә, йәйгеһен бесән эшләй, ҡыш етһә, Әбйәлил районындағы бер ял йортон ярылған утын менән тәьмин итә. Һуңғыһын эшләр өсөн атаһы менән делянка алалар ҙа, утынды ярып, йөкләп, ташып һаталар. Бына шулай донъя көтәләр.

**▸ Рафаэль тәрбиә темаһын ҡуҙғатты. Уның еҙнәһе, атай һүҙен тотоп, атай йортонда йәшәргә ҡарар иткән. Йәштәрҙе ниндәй тәрбиәүи ысулдар менән ауылда ҡалдырырға була?**

**Тимур:** Балаға бындай тәрбиәне бары тик ата-әсә һәм үҙ өлгөһөндә генә тәрбиәләй алалыр, тип уйлайым. Яҡшы тәрбиә биреү өсөн ата-әсәнең халыҡ традицияларын белеүе, шулай уҡ нескә психолог, пе-

**✓ Ә бына "Газетта" клубына ул яҡтан афарин тип кенә әйтергә ҡала. Унда йырсы Заһир Ҡунафин айыҡ осрашыуҙар ойоштора башланы. "Ҡатыҡ-party" тип атала ул. Бында һыра урынына ҡымыҙ һәм кефир һатыла.**



дагог булыуы ла талап ителә. Юғиһә, шундай ҙур тырышлыҡ һалынып та, бала менән уртаҡ фекергә килә белмәү арҡаһында "тәртә һындырып" ҡуйыла. Ул сағында күптәргә "Әсә күңеле - балала, баланыҡы - далала", тип йырларға ғына ҡала.

**Хәйҙәр:** Шулай, күп нәмә ололарҙың үҙҙәренә бәйле. Әгәр балаға өйөндә лә, мәктәптә лә: "Һиңә күҙ терәп торабыҙ, һин ауылда йәшәргә тейешһең", - тигән фекерҙе һеңдерһәң, бала бер ҡайҙа ла китмәйәсәк. Ә беҙҙең ауылдарҙа, киреһенсә: "Ауылда эске, бында ни бар, ҡалаға барығыҙ", - тип, йәш кеше аңында ауылдың бәҫен төшөрәләр. Әлбиттә, был махсус рәүештә эшләнмәйҙер инде, ә ауыл хужалығының бөлгөнлөккә төшөүе арҡаһында шулай килеп сығалыр. Ун туғыҙынсы быуатта Рәсәйҙә "Халыҡҡа барыу" тигән хәрәкәт киң йәйелдерелгән булған. Ниңә беҙҙең быуынға, мәҫәлән, шулай итмәҫкә? Берәй

тураһында хәбәр ишетеп ҡалдым: бынан һуң ауыл халҡы үҙе аҫыраған малды махсус тәғәйенләнгән урындарҙа ғына һуйҙыра аласаҡ икән. Әлбиттә, үҙ ауылында бындай мал һуйыу цехтары булмаһа, был яңылыҡ халыҡҡа уңайһыҙлыҡтар тыуҙырасаҡ. Ләкин ундай цехты һәр ауылда ойоштороп була бит. Бына тағы

**Рафаэль:** Эйе, ауылда ҡыҙҙар аҙ. Ҡыҙҙарын ҡалаға сығарып ебәргән саҡта ата-әсә ҡала тормошо һәр кемде лә ыңғай яҡҡа үҙгәртмәй икәнен белһә ине. Ауыл мәктәбен тамамлаған саҡта ҡыҙҙар матур, әҙәпле, тәрбиәле була. Тик уларҙың ҡайһы берҙәре ҡалаға китә лә, дөйөм ятаҡ тормошо йоғонтоһонда юлдан яҙа. Был

нән бәйләнгән, минеңсә. Йәштәр алкоголгә тиҙерәк бирешә, баштарын тиҙерәк юғалта. Шуға ауыл ерендә лә, ҡалала ла айыҡлыҡ өсөн көрәш алып барырға кәрәк. Был йәһәттән иң тәүҙә оло быуын яҡшы өлгө күрһәтергә тейеш.

**Рафаэль:** Эйе. Күптән түгел "Өфө уттары"нда концерт булғайны, шунда бер хәлгә апты-

рышалар. Бәлки, был законды тулыһынса ҡабул итеп булмайҙыр ҙа. Ләкин спиртлы эсемлектәрҙе һатыу һәм "эсеү" күләмен күпкә ҡыҫҡартырға булалыр, тип уйланыла. Алкоголле эсемлектәрҙе электрон карточка аша ғына һатыу ойошторорға кәрәктер, бәлки. Ун һигеҙ йәшкә тиклемге бала карточка менән һатып ала икән, был тауарҙы кем һатып алыуы һәм кемдең һатыуы шунда уҡ теркәлеү үтһен. Хәҙерге информацион технологиялар аша быны күҙәтеүе еңел. Шул саҡта балалар араһында эскелек аҙайыр ине.

**▶ Үҙегеҙҙең киләсәгегеҙҙе ниндәй итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Рафаэль:** Ниәт итергә һәм сәбәп ҡылырға кәрәк. Әле мин үҙемде аңлаған башҡорт ҡыҙына өйләнеп, аҡыллы балалар үҫтерергә хыялланып йөрөйөм. Хәләл ефетең һине аңлаһа, һине нисек бар, шулай ҡабул итһә, шул еткәндер, тип



# КИТЕП БӨТКӘС... йәштәр?

мәл, мәҫәлән, беҙҙең быуын 35-40 йәштәрҙә ҡалалағы фатирын һатып, ауылға ҡайтты ла, ауылда эшләй башланы икән, ти. Уларҙың балалары ла ошо уҡ ауылда төпләнергә бик мөмкин бит.

**▶ Ауылда ниндәй эшҡыуарлыҡ төрө менән шөғөлләнергә була? Мәҫәлән, аҙмы-күпме башланғыс капиталға эйә булһағыҙ, һеҙ ауылда ниндәй шөғөл менән халыҡҡа хеҙмәт итер инегеҙ?**

**Тимур:** Мин, моғайын, ата-бабалар һымаҡ, умартасылыҡ менән шөғөлләнер инем. Тик бының өсөн бал ҡортоноң серҙәрен белеү генә аҙ, баҙар, иҡтисад серҙәрен дә һупалау кәрәк. Икенсе мәсьәләгә килгәндә, конкуренцияны ла еңергә булалыр, тип уйлайым: 20-30 баш умартаң менән ҙур баҙарға сығып булмай. Бернисә умартасы берләшеп, магазинды йылына нисәлер тонна бал менән тәьмин итәсәге тураһында килешеү төҙөһә, бал һатыуҙы ла яйға һалырға була. Селтәрҙәр, берләшмәләр, кооперативтар шуныһы менән отошло ла инде.

**Рафаэль:** Бөгөн ауыл халҡы хәләл итен ҡайҙа һатырға белмәй, шунлыҡтан, мал иҫәбен ҡыҫҡарта. Минеңсә, ауылдаштар етештергән итте берәй ит комбинатына һатыуҙы ойоштороуҙан да килем алырға була. Әйткәндәй, әле яңыраҡ ҡына малсылыҡ тармағына ҡағылған яңы бер регламент

бер шөғөл һәм өҫтәмә эш урындары.

**Хәйҙәр:** Мин дә егеттәрҙең әйткәне менән килешәм. Тағы, төҙөлөш материалдары һатыу менән шөғөлләнергә булалыр, тип уйлайым. Әгәр үҙеңдең йөк машинаң булып, ауылда берәй нөктәң булһа, буяуҙар, төҙөлөш материалдары, таҡта, цемент һатыу менән дә шөғөлләнергә мөмкин.

**Рафаэль:** Ул сағында клиенттар аҙ булмаҫмы? Ғөмүмән, ауылға бындай магазиндар кәрәкме?

**Хәйҙәр:** Шуның өсөн тауарҙы төрлө ауылдар буйлап йөрөтөп һатырға була.

**▶ Тимур ҡалаға сығып китеүенең бер сәбәбе тип ауылда ҡыҙҙар юҡлығын атаны бит әле. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар-йондоҙҙар тураһында ла һөйләшеп алайыҡ...**

хәлдән сығыу юлын мин шунда күрәм: ҡыҙҙарҙы ауылда уҡ ҡала һынауҙарына бирешмәҫлек итеп тәрбиәләргә кәрәк.

**Хәйҙәр:** Эйе, ҡала йәштәргә төрлөсә тәьҫир итә. Йәштәр ҡалала артыҡ шашынмаһын өсөн һыналған ысулдар бар. Бер яҡтан, дин, икенсе яҡтан, туғандар тарафынан тәрбиә һәм контроль. Мәҫәлән, Кавказ егеттәре, үҙҙәренең ҡустыһеңлеләрен ҡалаларҙа ла гел ҡарап йөрөтә, контролдә тота. Мин ул тиклем ҡаты саралар яҡлы ла түгелмен, шулай ҙа туғандар йәш кешене күҙ менән ҡаш араһында тоторға тейештер, тип уйлайым.

**Тимур:** Ҡыҙ кешене ҡырҡ ерҙән тый, тиелә бит мәҡәлдә лә. Шуның һымаҡ, тәрбиә ата-әсәнән дә тора. Ҡыҙҙарын ул ҡәҙәре бер ҡатлы, ышанып барыусан итеп тәрбиәләмәһен ине ата-әсәләр.

**Рафаэль:** Ауылда ата-әсәһе менән йәшәгән саҡта ҡыҙ бала ирек күрмәй үҫә. Ҡалаға килеп, ирек тигән нәмәнең тәмен татығас, бәйҙән ысҡына.

**Хәйҙәр:** Ошо проблемаларҙың 80 проценты эскелек ме-

раным. Минең таныш егет дуҫлашып йөрөгән ҡыҙына һыра һатып алып бирҙе лә, икәүләп эсә башланылар... Ә бына "Газетта" клубына ул яҡтан афарин тип кенә әйтергә ҡала. Унда йырсы Заһир Ҡунафин айыҡ осрашыуҙар ойоштора башланы. "Ҡатыҡ-party" тип атала ул. Бында һыра урынына ҡымыҙ һәм кефир һатыла. Ошоноң һымаҡ ыңғай күренеш булырлыҡ сараларҙы күберәк үткәрергә кәрәк - йәштәргә "йоғасаҡ" ул.

**Тимур:** Айыҡ һәм сәләмәт йәшәү рәүеше тураһында гәзиттәрҙә күберәк яҙырға, телевидение тапшырыуҙарын йышыраҡ күрһәтергә кәрәк. Кем мәғлүмәтле, шул донъя менән идара итә.

**Хәйҙәр:** Эскелекте бөтөрөп булмай, тип ҡул һелтәргә ярамай. Ун биш-егерме йыл элек Финляндияла беҙгә ҡарағанда ла хәлдәр хөртөрәк булған, тиҙәр. Эскелекте тулыһынса тыйып ҡына бар йәһәттән күтәрелгән финдар. Беҙҙә: "Ҡоро закон ҡабул итеүҙән файҙа юҡ", - тип ышандырырға ты-

уйлайым. Ауыл темаһына килгәндә, бөгөнгө һөйләшеү башында бер төрлө уйлаһам, һөйләшеүебеҙ аҙағында ауылға ҡайтыу тураһындағы ҡарашым бер ни тиклем үҙгәрҙе. Әлеге лә баяғы, ғаиләң-ҡәлғәң ныҡлы булһа, ауыл ерендә лә тырышып донъя көтөргә була. Киләсәктә мин дә, бәлки, ауылда йәшәрмен. Күҙ күрер.

**Хәйҙәр:** Хөкүмәттән, етәкселәрҙән генә көтөп ятырға түгел, ә үҙеңә уйларға, үҙеңә нимәләрҙер эшләргә тырышырға кәрәк. Яҡты киләсәкте көтәбеҙ, ләкин уны яҡынайтыу өсөн үҙеңә көс түгеү фарыз. Ниндәй генә катаклизмдар, революциялар булмаһын, халыҡ үҙен һаҡлап ҡалыу юлдарын тапҡан. Беҙ, йәш быуын, шулай уҡ ябай булмаған һынау алдындабыҙ, ләкин беҙ уны лайыҡлы үтергә тейешбеҙ. Тик донъялар ғына тыныс булһын.

**Тимур:** Яңыса уйларға кәрәк. Сайттар, порталдар төҙөйөк. Социаль селтәрҙәр ярҙамында халыҡтың аңын күтәрергә, күҙҙәрен асырға, йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Үҙемә килгәндә, минең өс принцибым бар: тәбиғәткә, әйләнә-тирәләге кешеләргә һәм үҙеңә зыян килтермәҫлек итеп йәшәү. Артабан да ошо ҡағиҙәләрҙән ситләшмәйәсәкмен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылдарҙы тергеҙеү тураһында һүҙ алып барған саҡта төп һүҙ әйтелдеме, юҡмы - быныһын уҡыусы билдәләр. Әйтелмәһә, һөйләшеүҙе дауам итербеҙ. Хат-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***Бөгөн ауыл халҡы хәләл итен ҡайҙа һатырға белмәй, шунлыҡтан, мал иҫәбен ҡыҫҡарта. Минеңсә, ауылдаштар етештергән итте берәй ит комбинатына һатыуҙы ойоштороуҙан да килем алырға була. Әйткәндәй, әле яңыраҡ ҡына малсылыҡ тармағына ҡағылған яңы бер регламент тураһында хәбәр ишетеп ҡалдым: бынан һуң ауыл халҡы үҙе аҫыраған малды махсус тәғәйенләнгән урындарҙа ғына һуйҙыра аласаҡ икән. Әлбиттә, үҙ ауылыңда бындай мал һуйыу цехтары булмаһа, был яңылыҡ халыҡҡа уңайһыҙлыҡтар тыуҙырасаҡ. Ләкин ундай цехты һәр ауылда ойоштороп була бит. Бына тағы бер шөғөл һәм өҫтәмә эш урындары.***

✓ *Ҡатында үҙенең ысын улын кисекмәҫтән күреү теләге көслө ине. Ул был хаҡта юлдашына әйтергә бер-ике тапҡыр ынтыла бипеп тә ҡуйҙы, ләкин баҙнат итмәйерәк ҡалды. Ҡайтып етәрәк был хаҡта ир үҙе һүҙ башланы.*



# ЮҒАЛТЫУ – ТАБЫШТАРЫ

## (Булған хәл)

Йәше еткәс, Иреген махсус мәктәпкә уҡырға бирҙе. Һәр көн үҙе оҙатып ҡуйып, дәрестәрҙән һуң үҙе ҡаршы алды. Бәләкәй сағында бик үк белендермәһә лә, һуңғы осорҙа улы башы ауыртыуға йышыраҡ зарлана башланы, ҡапылдан һушын юғалтыуҙар ҙа йышайҙы. Малайҙы тикшереп торған табиптар уны тиҙ арала Өфөләге дауаханаға илтеп һалырға ҡуштылар.

- Һаумыһығыҙ! - тигән тауышҡа һиҫкәнеп, һепертке һабын ҡосаҡлап уйға батҡан йәш ҡатын башын күтәрҙе. Ҡаршыһында бәләкәй сумкаһын яурынына аҫып, бер ҡулы менән торт ҡабы тотҡан урта йәштәрҙәге ҡатын баҫып тора ине. Уның йөҙө лә, тауышы ла таныш булыуын иҫләп: "Кем булды һуң әле был?" - тип уйлай һалып та ҡуйҙы Зифа.

- Мин Хәлимә, бала табыу йортонда шәфҡәт туташы булып эшләйем. Һинең улыңды ла мин ҡабул итеп алыштым... Уның кендек инәһе, тиһәң дә ярай, - тине ҡатын уның янына сүгәләп.

- Эйе, эйе, иҫләйем, - тип яуапланы Зифа уны хәтеренә төшөрөп.

Хәлимә бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы ла, ҡулындағы тортына күрһәтеп:

- Ваҡытың булһа, әйҙә, бүлмәңә инеп, сәй эсәйек әле. Һиңә һөйләр һүҙем дә бар ине, - тине. Зифа аптырай биреп уға текәлде.

- Әйҙә һуң, - тип урынынан торҙо.

Өҫтәл артына ултырғас, Хәлимә сынаяғын ҡулына тотҡан килеш һүҙ башланы.

- Мин һеҙҙең хаҡта һорашып, белешеп тороп, һәр саҡ хәбәрҙар булдым. Ҡыҫҡаһы, баланды тапҡандан һуңғы тормошоң күҙ алдымда булды... Сөнки... сөнки улыңдың зәғифләнеүендә мин генә гәйепле, - тип, сынаяғын өҫтәлгә ҡуя һалып, битен ҡулдары менән ҡаплап, илап та ебәрҙе.

"Нисек?" - тип һорарға ынтылған Зифа уның һулҡылдауы бөтөүен көтөп, туҡтап ҡалды.

- Ул ғүмерлек ауыр төйөн булып, бына бында, ғорламда тора... Улыңа операция кәрәклеген, уның өсөн байтаҡ аҡса ла һорағандарын ишеткәс, йыны килмәй булдыра алманым, - тине Хәлимә ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөртөп. Һәм ҡапыл ғына әйтеп ҡуйҙы: - Ә беләһеңме, аҡсаны атаһынан һорарға кәрәк. Моғайын, баш тартмаҫ.

"Ни һөйләй был?" тип уйлап, Зифа аптырап ҡатынға ҡараны.

- Нисек һорайһың, атаһын төрмәлә үлтерҙеләр бит инде, - тине ул.

- Юҡ, юҡ, ысын атаһынан һорарға кәрәк! - Хәлимә урынынан үк тороп баҫып, әңгәмәсеһенең ҡулдарына йәбеште.

Зифаның башынан: "Ни һөйләй был иҫәр, үҙ баламдың атаһы кем икәнен унан яҡшыраҡ беләмдер инде", - тигән уй үтеүгә, Хәлимә:

- Әйҙә, матур кейемдәреңде кей ҙә, Ҡасим Дәүләтовичҡа барабыҙ. Завод директоры баланы өсөн аҡса йәлләмәҫ әле, - тип, уны өгөтләргә үк тотонып китте.

- Кит, апай, ниндәй Ҡасим Дәүләтович? Нимә һөйләйһең ул? - тине Зифа ҡулдарын һелкеп.

- Тыңла, һылыу, һөйләгәсһөйләйем инде... Һинең менән бер палатала Алина исемле бер тәтәйбикә ятты бит. Иҫләйһеңдер, тәҫкә-башҡа бик сибәр, әммә үтә лә тәкәббер, мыжыҡ ҡатын? - тине Хәлимә һораулы ҡарашын төбәп.

"Иҫләйем", тигәнде аңлатып, Зифа башын ҡаҡты.

- Һеҙ икегеҙ ҙә бер көндә, бер үк ваҡытта, тип әйтерлек бушандығыҙ. Алинаның балаһы тыуғас, сабыйҙар ятҡан бүлмәгә илтеп һалғанда, ул ҡапыл тыпырсыны, абайламаҫтан ҡулымдан төштө лә китте. Шаҡ итеп башы менән иҙәнгә бәрелде лә хәрәкәтһеҙ ҡалды. "Ах, үлтерҙем, бугай!" - тип ҡотом осоп, үрелеп баланы ҡулыма алыуға, артымда баш врачтың: "Нишләйһең, йүнһеҙ!" - тигән асыулы тауышы ишетелде. Ул да йүгереп килеп, сабыйҙы ентекләп ҡарарға тотондо. "Былай тере, әммә ғүмергә зәғиф булып ҡалыуы бик мөмкин", - тигәс кенә эсемә әҙерәк йән керҙе. "Беләһеңме был кемдең балаһы?" - тине лә баш врач ҡала хакимиәтендә эшләгән ҙур ғына етәксенең исемен атаны. "Әгәр белеп ҡалһалар, һәм, әлбиттә, был үҙен белендерәсәк, эштән генә ҡыуып ҡалмаҫтар, башыбыҙҙы төрмәлә серетәсәктәр бит, - тип өҫтәп ҡуйҙы ла теҙелешеп йоҡлап ятҡан сабыйҙарҙы ҡараштырғылай башланы. Һинең балаң янында туҡтап ҡалды ла: "Бер-береһенә оҡшап та торалар, алыштыр биркыларын", - тип, миңә бойорҙо һәм эш икебеҙҙең арала ғына сер булып ҡаласағына ҡат-ҡат ишара яһаны.

Зифа ҡатындың һөйләгәндәрен башта әкиәт һымаҡ ҡына ҡабул итеп, булмаҫтайҙы һөйләй, тип тыңлаһа ла, ҡайһы саҡ үҙенең дә Иргенең йөҙөндә, холоҡ-фиғелендә ят сифаттар шәйләп, сит балалай күренәсе, тип уйлап ҡуйыуы иҫенә төшөп, ышана биреп ҡуйҙы. Хәлимәнең:

- Әллә ышанмайһың? Бына икмәк өҫтә, - тип ант итә-итә үҙен ҡосаҡлап илауы һәм туҡтауһыҙ ғәфү үтенеүе уның һөйләгәндәре хаҡ булыуын дәлилләмәй ҡалманы. Зифа ни әйтергә лә, ни уйларға ла белмәй, байтаҡ шым ғына ултырҙы. Аҙаҡ Хәлимәгә: "Үҙегеҙҙе генә ҡайғыртып, башҡаларҙың яҙмышын ҡайһылай еңел хәл итәһегеҙ һеҙ", - тип әйтергә уҡталғайны ла өндәшмәй ҡалды. Хәлимәнең үҙ гәйебен танып, уның өсөн йән ғазабы кисереүен аңлау, атаһына барып ярҙам һорайыҡ, тип, бала өсөн хәстәрлек күрергә ынтылыуы күңелендәге уға ҡарата уянған нәфрәт тойғоларын баҫырға мәжбүр итте. Шунда ул үҙенең йәшле күҙҙәрен төбәгән ҡатындың көнөшен тотмауҙан башҡа сара юҡлығын да төшөндө.

Илле алла, ҡырҡ мулла менән, тигәндәй, завод директорының ҡабул итеү бүлмәһенә үтеп инә алды ҡатындар. Ҡасим Дәүләтович тигәндәре һомғол буйлы, асыҡ ҡарашлы утыҙ биш йәштәр самаһындағы ир-егет булып сыҡты. Ул Хәлимә һөйләгәндәрҙе бүлдермәй генә тыңланы. Аҙаҡ, ике усы менән сикәләрен ҡыҫып, байтаҡ ҡына өнһөҙ ултырҙы һәм ҡапыл ғына иҫенә килгәндәй, урынынан тороп, ары-бире йөрөп алды ла, телефон аша шоферына бала табыу йортоноң баш табибын табып килтерергә ҡушты. Баш табип бүлмәгә килеп инеп, Хәлимә менән Зифаны күргәс тә эштең ниҙә икәнен шунда уҡ төшөндө, шикелле. Директорҙың: "Был дөрөҫмө?" - тигән һорауына башын ғына ҡағып, ҡарашын иҙәнгә төбәне.

- Хәҙер ни эшләйбеҙ? - Ҡасим Дәүләтович ҡаршыһында ултырыусыларға тишерҙәй итеп берәм-берәм ҡарап сыҡты.

Бер ниндәй ҙә яуап булмағас, урынынан тороп, Зифа янына килде лә:

- Мин иртәгә үк Өфөгә юл тотам, теләһәгеҙ, һеҙҙе лә алып барам, - тип, Ирек ятҡан дауахана хаҡында белеште.

Юлдың яртыһын тип әйтерлек шым ғына үттеләр. Талбаҙыны уҙғас, Ҡасим Дәүләтович Зифаға борола биреп ултырып, унан ентекләп һораша башланы. Аҙаҡ, асылып китеп, үҙе хаҡында ла аҙ-маҙ һөйләп алды. Сағыштырмаса йәш булыуына ҡарамаҫтан, ул предприятие етәксеһе булып та, ҡала хакимиәтендә лә, президент аппаратында ла эшләп өлгөргән булып сыҡты. Хәҙер бына тыуған ҡалаһындағы ҙур ғына заводҡа директор итеп тәғәйенләгәндәр.

Палатаға килеп ингәс, ул һүҙһеҙ генә малайға бик оҙаҡ итеп ҡарап торҙо һәм яҡын килеп, Иректең башынан һыйпаны ла, Зифаға: "Һеҙ бында булығыҙ, миңә баш табипты күрергә кәрәк", - тип сығып китте. Белдермәҫкә тырышһа ла, уның ныҡ тулҡынланыуы йөҙөнә лә сыҡҡан, тауышында ла һиҙелә ине.

Ҡайтырға сыҡҡас, ир менән ҡатын күптәнге таныштар һымаҡ һөйләшеп ҡайттылар. Зифаны юлдашының үҙен түрә тип тоймай, ябай ғына итеп һөйләшеүе, асыҡ та, итәғәтле лә булыуы арбаны. Бер урам һеперсеүсе менән үҙ тиңендәй күреп аралаша бит әле, тип уйлап, эстән генә ҡыуанып килде ул.

Ҡатында үҙенең ысын улын кисекмәҫтән күреү теләге көслө ине. Ул был хаҡта юлдашына әйтергә бер-ике тапҡыр ынтыла биреп тә ҡуйҙы, ләкин баҙнат итмәйерәк ҡалды. Ҡайтып етәрәк был хаҡта ир үҙе һүҙ башланы.

- Әлбиттә, һеҙҙең дә тиҙерәк улығыҙҙы, дөрөҫөрәге, улыбыҙҙы күреү теләге көслөләр, хатта балаларҙы алмаштырып алырға ла теләгегеҙ юҡ түгелдер. Осрашып күрешерһегеҙ, әммә алмашыу хаҡында һүҙ йөрөтөү иртәрәктер, тип уйлайым. Быының үҙ сәбәбе бар, - тине юлдашы Зифаға гәйепле тойолған ҡараш ташлап.

Бер аҙҙан ул ҡапыл ғына борола биреп ултырҙы ла, ҡатынының яман шеш менән сирләүен, әлеге хәл-ваҡиғаларҙы ишетеү, йәғни малайҙарының үҙенеке түгел икәнен белеү инде һуңғы сиккә етеп килгән кешенең үлемен тиҙләтеүе ихтималлығын әйтеп, был турала белдермәй тороу кәрәклеге хаҡында һөйләп бирҙе.

- Үтенеп һорайым, был әлегә сер булып ҡалһын, - тине ул һәм ҡапыл ғына иҫенә төшкәндәй, әйтеп ҡуйҙы. - Хәйер, улыбыҙ менән көн дә аралашыу мөмкинлеге бар. Ҡатыныма ла, малайға ла кисекмәҫтән тәрбиәсе кәрәк, йәғни йорт хужабикәһе инде. Ризалашығыҙ, хеҙмәт хаҡын күпме һорайһығыҙ - шул саҡлы түләйәсәкмен.

Ризалашты Зифа. Йөҙйәшәр ҡарағайҙарға күмелеп ултырған ике ҡатлы ыҡсым ғына шәхси йортта йәшәп торорға уға ла бүлмә табылды. Әсә йөрәге үҙ ғәҙизен тәү күреүҙә үк үҙ итте. Ә Алинаны Зифа килгәндән һуң өс айҙан ерләнеләр. Атай кеше Ирек янына йыш йөрөнә. Ара-тирә үҙе менән Зифаны ла алып барғыланы. Улдарының баш мейеһенә операция көткәндән дә уңышлыраҡ үтте, тинеләр. Һауығыуы менән атаһы уны тура үҙ өйөнә алып ҡайтты. Ҡасим Дәүләтович Зифа өсөн күптән Ҡасимға ғына әйләнгәйне инде. Тәүге осрашҡанда уҡ бер-береһен яҡын күрә һалған ир менән ҡатын, аҡрынлап йөрәктәрендә оло хис ҡабыныр һәм был хис уларҙы ҡауыштырып та ҡуйыр, тип уйламағандарҙыр ҙа, бәлки. Табышыуҙар башлыса юғалтыуҙар аша килә шул...

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**

**(Аҙағы. Башы 4-се һанда).**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# НИ СӘСҺӘҢ, ШУНЫ УРЫРҺЫҢ,

## йәки Аҙашҡан әҙәм балаһы

**Учалы районының Уральск ҡасабаһында йәшәүсе Әлфирә Әлхәмова конкурсҡа Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ"тигән эшенең күсермәләрен ике данала эшләп, шуларға үҙенең ике төрлө фекерен белдереп яҙып ебәргән.**



Тәүге һүрәттә керешен тартҡан ҡарт яугирға табан осоп килгән уҡтарҙы автор "Аҡ көстәр" тип атап, һәр уҡҡа шундай сифаттар биргән: иман, изгелек, камил аҡыл, шәфҡәтлелек, рәхимлелек, тәҡүәлек, күндәмлек, тыйнаҡлыҡ, сабырлыҡ, мәрхәмәтлелек, күркәм холоҡ, әҙәплелек, ғәҙеллек, татыулыҡ, тыныслыҡ, йомартлыҡ, киң күңеллелек. Быының менән Әлфирә нимә әйтергә теләгән һуң? Эйе, әгәр ҙә ҡарт яугир керешен яуыз ниәт, ҡара көстәрҙең тәьсиренә бирелеп тартһа, уға кешелектең барлыҡ изге сифаттары яу булып киләсәк, йәғни яуызлыҡ бер ваҡытта ла язаһын алмайынса ҡалмаясаҡ. Яуызлыҡ хәрәкәткә килеүе була, барлыҡ изге сифаттар туплана, йәғни агрессия прогрессив көстәрҙе уята. Миҫалға XX быуаттың тәүге яртыһында Германияла барлыҡҡа килгән Гитлер фашизмын ғына алайыҡ.

Икенсе һүрәттә хат авторы яугирҙың керешенән ысҡындырған уғының "бумеранг ҡануны" буйынса үҙенә кире сифаттар булып әйләнеп ҡайтыуын бәйән итә. Ул сифаттар: яуыз ниәт, алдашыу, урлашыу, көнләшеү, ҡомһоҙлоҡ, ялҡаулыҡ, тәкәбберлек, маҡтансыҡлыҡ, ғәйбәт, эскеселек, яуыз холоҡ, ололарҙы йәберләү. Әлфирә Әлхәмова ошоларҙан сығып, һүҙен шулай тамамлай: "Тук-

ЯҢЫ РУБРИКА: "ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ..."

**Мин Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Аҡйондоҙ" балалар бейеү ансамблен етәкләйем. Күптән түгел Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамбленең "Фәйзи Ғәскәров мираҫы" тигән яңы программаһын ҡарарға тура килде. Ысынында, үҙемдең эшмәкәрлегем нигеҙендә лә тап Фәйзи Ғәскәров мираҫы ята, тип иҫәпләгән кеше булараҡ, был программаның сәхнәгә сығарылыуын көтөп алдым.**

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕН БОҘМАЙЫҠ!

## Фәйзи Ғәскәров та был талапты ҡәтғи ҡуйған



Башҡорт егеттәре бейеүендә ҡулдарҙың торошо ошолай булырға тейеш.

Ауыл хужалығы институтында уҡығанда уҡ уҡыу йортоноң бейеү ансамблендә бейей башлағайным. Шул осорҙа Фәйзи Әҙһәм улы һәм уның бейеүселәре беҙгә "Ҡороҡсолар" бейеүен һалғайны. Фәйзи Ғәскәров үҙе, уның мәктәбен үткән бейеүселәр - ансамблебеҙ етәксебеҙ Фәниә Гәрәева, шулай уҡ Тәлғәт Урманов, Радик Харисов һәм башҡа бейеүселәр ул ваҡытта беҙгә башҡорт бейеүенең асылын ныҡлап төшөндөрҙөләр, тип уйлайым һәм ғүмерем буйы ошо асылдан ситләшмәҫкә, бөйөк бейеүселәр мираҫына хилафлыҡ килтермәҫкә тырышып ижад ителде.

Хәҙер иһә данлыҡлы коллективтың беҙ тамаша ҡылған программаһы тураһында бер кәлимә һүҙ әйткем килә. Ансамблдең алтын фондын тәшкил иткән, инде күптән классик өлгөгә әйләнгән "Гөлнәзирә", "Зарифа", "Өс таған" кеүек бейеүҙәр ярайһы уҡ юғары кимәлдә башҡарылды, тик бейеүҙәрҙе тергеҙеү өҫтөндә эшләү өсөн ваҡыт етеңкерәмәгәнме, әллә башҡа сәбәптәнме, уларҙа ла ҡытыршылыҡтар күҙгә салынды барыбер. Дөйөмләштереп әйткәндә, уларҙа актерлыҡ оҫталығы икенсе планға ҡалдырылғайны.

Яңынан тергеҙелгән "Тәпән" исемле ҡатын-ҡыҙ бейеүен дә күрҙек. Ниңәлер, бейеүҙең төп нөсхәһендәге ҡайһы бер өлөштәре, шул иҫәптән төп бейеүсенең йырлаған урыны төшөрөп ҡалдырылған. Ә ул бейеүҙең бик матур бер күренеше ине. Төп бейеүсе йырлай белмәһә, хәҙер фонограммаға ла йырлап була бит. Тәпәнгә тәре һүрәте төшөрөлгән - бының менән нимә аңлатырға теләгәндәр икән?

Фәйзи Ғәскәров: "Башҡорт бейеүендә трюктар менән артыҡ мауығырға ярамай", - ти торғайны. Башҡорт бейеүенең сюжетлы булыуын, драматургияһы тәүге планға сығыуын бейеүҙәребеҙҙең төп маҡсаты, байлығы, тип иҫәпләгәндер маһир бейеүсе, тип уйлайым. "Төньяҡ амурҙары" бейеүендә ошо йәһәттән бигерәк тә һаҡ булырға кәрәктер, тигән фекер тыуа, сөнки унда украин бейеүе "Гопак"тан алынған трюк ҡулланылған. Халҡыбыҙҙың иҫ киткес бай легендалы "Ете ҡыҙ" лирик бейеүен дә ҡыҙҙар берҙәм образ, берҙәм һулыш, эске тойғо, кисерештәр менән башҡара алманы.

Ниһайәт, концерттың аҙағында Фәйзи Ғәскәровтың ҡасандыр Учалы районында "Ләйсән" бейеү ансамбленә һалған "Беҙҙең байрам" бейеүен тәүге тапҡыр профессиональ сәхнәлә башҡарҙылар. Профессиональ коллектив башҡарыуындағы был бейеү мине уйға һалды, кәйеф тә төштө, сөнки был сығыш менән концертҡа уңышһыҙ нөктә ҡуйылған һымаҡ булды. Эйе, Фәйзи Ғәскәров ҡайһы бер бейеүҙәрен үҙешмәкәр бейеү коллективтарында ҡуйған, әгәр күңеленә ятһа, үҙенең ансамбленә күсергән. Кәрәк, тип тапһа, ул "Беҙҙең байрам" бейеүен ул ваҡытта уҡ ансамблгә һалыр ине. Ғөмүмән, был бейеү профессиональ коллективтың репертуарында урын ала аламы икән, тигән һорау тыуа.

Әлбиттә, ҡайһы ғына балетмейстерҙы алһаң да, уның бар һалған бейеүҙәре лә оҙон ғүмерле булып, репертуарҙа урын алмауы ла ихтимал. Сөнки ижад емеше тамашасы баһаһына мохтаж, унан һуң, ваҡыт-дәүер һынауын үтеп тә, уларҙың бөгөнгө заманда актуаллеген юғалтыуы бар. Фәйзи Ғәскәров йөҙ йылға бер килә торған бөйөк шәхестәрҙең береһе. Ул башҡорт күмәк бейеүенә нигеҙ һалыусы, башҡорт бейеүен төптән өйрәнеүсе, уның һәр хәрәкәтенә мәғәнә һалып, бейеүҙе миниспектаклгә әйләндергән, ябайлыҡта бөйөклөк тапҡан кеше. Ул үҙенән һуңғы балетмейстерҙарға буй етмәҫлек өлгө булып тора. Уның бейеүҙәре эргәһендә урын алырлыҡ күмәк башҡарылған бейеүҙәр һалыуы мөмкин дә түгел һымаҡ. Уның башҡорт бейеүенә ҡуйған талаптары хәҙер беҙгә - балетмейстерҙарға бик ҙур яуаплылыҡ һала, хатта ниндәйҙер кимәлдә ауырлыҡ та тыуҙыра, тип тә әйтер инем. Ә бына уның мираҫын түкмәй-сәсмәй, дөрөҫ итеп һаҡлап ҡалыу беҙҙең ҡулдан килә, ул беҙҙең изге бурысыбыҙ.

Ошо урында башҡорт бейеүе хәрәкәттәренә, йәки бейеү лексикаһына ҡағылған әйберҙәр тураһында ла әйтеп китергә теләйем. Фәйзи Әҙһәм улы, уның уҡыусылары ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәхнәлә йөҙөп йөрөүен талап итһә, ир-егеттәр төп башҡорт хәрәкәтендә ергә һеңеберәк, тип әйтәйемме, йөрөргә тейеш, ти торғайны. Үкенескә күрә, күп коллективтарҙа быны үтәмәйҙәр. Бындай осраҡта бейеүсе күңел һалмай, ихласлыҡ бирмәй йөрөгәнгә оҡшай, бейеүҙең темпераменты, динамикаһы төшә.

**Ир-егеттәрҙең алда әйтелгән "төп башҡорт хәрәкәте"ндә ҡулдарҙың торошон Фәйзи Ғәскәров ҡәтғи итеп ҡуйған: йоҙроҡ билдәге ҡайыш башы кимәлендә, уның ус яғы кәүҙәгә ҡарап торорға һәм улар араһында билдәле алыҫлыҡ булырға тейеш. Хореограф ниндәй генә эҙләнеүҙәр юлында булмаһын, ошоноң кеүек үҙгәртелмәй торған ҡағиҙәләргә буйһонған хәрәкәттәрҙе боҙорға тейеш түгел. Әгәр ошондай ҡағиҙәләр боҙола икән, башҡорт бейеүе үҙ йөҙөн юғалта, башҡорт халҡының темпераментына, характерына тап килмәгән манера барлыҡҡа килә.**

Алдараҡ әйтелгән хәрәкәттә ҡулдарҙың өҫкә күтәрелә барыуы Башҡортостан филармониялары бейеүселәрендә һәм башҡа үҙешмәкәр коллективтарҙа урын ала килә. Башҡорт егеттәре бейеүендә ундай "маҡтансыҡ" түгел, тик "ғорур", "ирекле" манера ғына өҫтөнлөк итергә тейеш. Был, әлбиттә, махсус уҡыу йорттарындағы хореография бүлектәрендә эшләгән хореографтарҙың да етешһеҙлеге. Етәксе хореографтар менән даими рәүештә башҡорт бейеүе буйынса семинарҙар, оҫталыҡ кластары үткәреү файҙалы булыр ине. Фәйзи Ғәскәров ансамблендә лә төп башҡорт хәрәкәтендә ҡулдарҙы өҫтә тотоу, осоноп йөрөүҙәрҙе күреү күңелде ҡыра. Яңыраҡ ҡына ундай күренештәр юҡ ине бит әле. Ни өсөн беҙ шундай яңылышлыҡтарҙы тиҙ генә һеңдерәбеҙ, Фәйзи Ғәскәров мираҫына хыянат итәбеҙ? Был бит бер аҙым алға, ике аҙым артҡа атлау менән бер.

Хореография буйынса китаптарҙа шундай фекерҙәр бар: бейеү сәнғәте авторитеттарының яңылышыуы бейеү сәнғәтендә ҡайһы бер кире күренештәргә лә килтереүе ихтимал. Сөнки уларҙы ҡабатлайҙар, уларға оҡшарға тырышалар. Ундай хореографтарға бигерәк тә яуаплы булырға кәрәк. Башҡорт бейеүен ниндәйҙер яңылыҡтарға байытыу ниәте менән бергә төп ҡанундарҙан ситкә тайпылырға, башҡорт бейеүен башҡа милләт бейеүҙәре элементтары менән һуғарырға, башҡорт халҡына хас булмаған манера, темперамент кеүек әйберҙәр тағырға тырышырға ярамай. Әйтәйек, башҡорт бейеүендә ир-егеттәр темпераментты Кавказ егеттәре һымаҡ ҡулдарҙы күкрәк тәңгәленә күтәреп, хис-тойғоларҙы йөҙгә сығарып күрһәтмәй, уның темпераменты "йүгәнле", эстән тышҡа бәреп сығырға торған көс күрһәтеүгә ҡайтып ҡала. Был, минең уйымса, испан бейеүҙәренә оҡшашыраҡ булыр ине.

Әлбиттә, заман алға атлай, бейеү сәнғәтендә лә башҡарыу кимәле бер урында тормай, акценттар үҙгәрә, тик халҡыбыҙҙың холоҡ-фиғеле, матур һыҙаттары тормоштан да, бейеүҙән дә юғалырға тейеш түгел.

Башҡортостандың йөҙөк ҡашы булған, бөтөн донъяға билдәле, бөйөк Фәйзи Ғәскәров исемен йөрөткән бейеү ансамблен уңышһыҙ эксперименттар майҙансығына әүерелдермәйек. Булғанды юҡҡа сығарыу өсөн күп кәрәкмәй, ә кире тергеҙеү күпкә ҡыйыныраҡ буласаҡ. Ансамблдә талантлы йәш бейеүселәр эшләй. Улар менән башҡа милләт бейеүҙәрен һәм бигерәк тә башҡорт бейеүҙәрен яҡшы белгән профессионалдар эшләргә тейеш. Башҡорт бейеүенең үҙ йөҙөн юғалтырға мөмкинлек бирһәк, башҡарыу кимәлен үҙешмәкәр бейеү коллективтары кимәленә төшөрһәк, быны беҙгә бер кем дә ғәфү итмәйәсәк.

**Әнүәр ШАФИҠОВ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйылғы Мәҙәниәт йылында мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт өлкәләрендәге етешһеҙлектәр, хаталар, хәл итә торған мәсьәләләребеҙ тураһында "Тураһын әйткәндә..." тигән майҙаныбыҙҙа бына ошолай бит тырнашмай ғына тураһын әйтеп һөйләшеп алырға саҡырабыҙ. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

та, әҙәм балаһы! Сәсмә зәһәр яуыҙлығыңды, ал ҡоралыңды ситкә. Етәр! Һуңғы һулышыңды алғанға тиклем изгелек эшләп ҡал. Сөнки ҡылған яуыҙлыҡтарың ваҡыт үтеү менән үҙеңә кире әйләнеп ҡайтасаҡ. Уйлан, кешем! Әле һуң түгел..."

Быға тиклем конкурста ҡатнашыусылар Йәлил Сөләймәновтың "Һуңғы уҡ" тигән һүрәтен, асылда, халҡыбыҙ тарихына бәйләгәйне. Әлфирә Әлхәмова иһә, уны дөйөм кешелектең мәңгелек проблемаларының береһенә бәйләп аңлата. Ул үҙ вариантын "Ни сәсһәң, шуны урырһың, йәки Аҙашҡан әҙәм балаһы" тип атаған. Бик хуп.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Рәссамдың был һүрәтенә ҡарап Баймаҡтан сәсән-шағир Әкрәм Ҡәйепҡолов ошондай шиғыр яҙған:**

*Дауылдарҙа ҡолаһа ла*
*Дәү ҡарағас,*
*Шаулап үҫә Уралтауҙа*
*Һанһыҙ ағас.*
*Һуңғы һартай ауғанда ла*
*Илен яҡлап,*
*Батырҙары алып ҡалған*
*Ерен һаҡлап.*
*Ғәйбәтселәр һаман ата*
*Тупаҡ уҡты.*
*Ауҙармаҡсы улар беҙгә*
*Яла-юкты.*
*Ҡиәмәтлек туғаныбыҙ*
*Күнләшһә лә,*
*Беҙгә ҡарап, тешен ҡайрап*
*Үсләшһә лә,*
*Башҡаларға иғтибарһыҙ,*
*Түгел ваҡсыл.*
*Алмисаҡтан халҡым йыйған*
*Оло аҡыл.*
*Уғын атмай, түҙемле ул*
*Башҡорт улы.*
*Алмисаҡтан аҡыл йыйған*
*Башҡорт оло.*

**Шулай итеп, "Бер һүрәткә ҡарап" конкурсы дауам итә, йәмәғәт. Йәлил Сөләймәновтың был һүрәтен алдағы һандарҙа икенсе бер рәссам һүрәте алыштырасаҡ, тигәйнек инде. Ә редакцияға килгән һәр яҙма жюри ағзалары иғтибарына еткереләсәк һәм конкурста еңеүселәргә рәссамдарҙың үҙҙәренең эштәре бүләк ителәсәк, тигән өмөттәбеҙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШ НУРҘАРЫ...

## ҡан баҫымын төшөрә

■ Яңы Зеландия ғалимдары стресс менән көрәш ысулдары өҫтөндә эшләгәндә яңы асыш яһаған. Баҡтиһәң, гел яҡшы кәйефтә булыу өсөн көнөнә 2 киви ашау ҙа етә икән. Етмәһә, был емеш-еләк ҡәһүә һәм тәм-томдо ла алыштыра ала. Кивиның составындағы биологик актив матдәләр яҡшы кәйеф сығанағы ғына түгел, ә стресс һәм депрессия менән көрәшеүҙә яҡшы ярҙам күрһәтә. Шулай уҡ уның составындағы емеш-еләк кислоталары артыҡ ауырлыҡтан да ҡотҡара. Һомғол буйлы булыу шулай уҡ яҡшы кәйеф тәьмин итә, ти белгестәр.

■ АҠШ-тың Милли сәләмәтлек институтында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һөт коктейлдәре газлы эсемлектәр кеүек үк һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Эрик Стайс белдереүенсә, коктейль составындағы шәкәр һәм майҙар уны хәүефле эсемлектәр рәтенә ҡуя. Һимереүҙе иҫкәртеү буйынса үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шул асыҡланған: кеше шәкәрҙе күберәк ҡулланған һайын, ул был татлы аҙыҡһыҙ тора алмай башлай. Сөнки шәкәр баш мейеһенең ҡәнәғәтләнеү үҙәген стимуллаштыра. Ғалимдар фекеренсә, шәкәрле ризыҡтарҙы даими ҡулланыу баш мейеһендә психик ауырыуҙары булған кешеләрҙең баш мейеһендәге кеүек тайпылыштарға алып килә.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйына "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, муйын ауыртыуы - психологик проблема. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Гарвард ғалимдары баш мейеһенең әүҙемлеген арттырыуға булышлыҡ итеүсе таблеткалар уйлап тапҡан. Тикшеренеүҙәр үткәреүсе ғалимдар әйтеүенсә, был асыш өлкән кешеләрҙең мейеһенә яңырырға мөмкинлек бирә, бынан һуң ул мәғлүмәтте ете йәшлек баланың мейеһе кеүек ҡабул итә башлаясаҡ. Етмәһә, ул быға тиклем йоҡлап ятҡан һәләттәрҙе уятыу көсөнә лә эйә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ



# ҺЫНАУҘАР...

## еңеүҙәр өсөн ойотҡо

### Тәбиғәттә ҡый үләндәре булмай

Егерме алты йыл ғүмерем мәктәп яны баҡсаһында үтте. Тәжрибәләр майҙаны ла, мәктәп, ауыл һәм район эсендәге дарыухана ла ине ул. Бигерәк тә үҙгәртеп ҡороуҙар, "тиҙләнеш" заманы башланғас, ҡулаҡса булмай киткәс, дарыуҙар ҡороғас ныҡлы терәк булды был баҡсалағы үҫемлектәр. Үҙебеҙ үҫтергәне генә 44 төрҙә булып, ҡырағай үҫкәндәре менән 50-55-шәр төргә етеп китә ине әҙерләгән үләндәребеҙ. Күберәк тын юлдары, аш һеңдереү, йөрәк һәм нервылар системаларына шифа булғандарын өйрәндек...

Ғүмере эсендә тән яраһы алмаған кеше бар микән? "Ямауың үҙендә", тиер ине оләсәй, иҫе китмәй генә, ҡанға туҙып ҡайтып инһәк. Ысынлап та, тишек-тошоҡтан торор ине тәнебеҙ, үҙ ямауы булмаһа, уға ауырға тура килер ине. Уратып алған тәбиғәт тә бит йән эйәһе. Күпме йырғыслап, тунап, яралар һалабыҙ үҙенә.Тырышып- тырмашып төҙәтә ул яраларын. Ҡаҙған, һөргән ерҙәрҙе баҫып алып торған үҫемлектәрҙе ҡый үләндәре тип атайбыҙ. Әммә улар ер яраһын көпләп торған ҡутыр ғына. Ваҡытлыса, йүнәлгәнсә...

Әммә ул ҡый үләндәре ер яраһы өсөн генә түгел, кеше организмы өсөн дә шифалы. Шуға ла ер ҡаҙғанда, сәскәндә, утағанда ҡый үләндәрен йыйып киптереүҙе ғәҙәткә индерергә кәрәк. Мәҫәлән, аяҡ аҫтында ғына баһалап бөткөһөҙ ул дарыуҙар - кесерткән, аҡтамыр, дегәнәк, бөтнөк, күгүлән, хуш еҫле ромашка, шайтан таяғы, һуҡыр кесерткән, юл үләне, ала миләүшә...Исемлекте әллә күпмегә һуҙып булыр ине. Дарыуҙан артып ҡалғандарын парник һәм теплица өсөн биоярыулыҡ итеп ҡулланып була.

Беҙҙең әйләнә-тирәбеҙҙәге иң зиһенле йән эйәһе - эт менән бесәйҙер ул. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр уларҙың кинәнеп китеп аҡтамырҙың япрағын кимергәнен. Үҙҙәренә кәрәген улар һәр саҡ таный. Беҙ генә был үҫемлеккә ҡаршы бөтмәҫ-тәкәнмәҫ көрәш асҡанбыҙ. Ә ул иң яҡын дуҫыбыҙ, дауалаусыбыҙ булыуға хаҡлы үләндәрҙең береһе. Һыуыҡ тейгәндән, бөйөр һәм бауыр таштары, ашҡаҙан-эсәк, тын юлы, енес ағзалары, тире ауырыуҙарынан, ревматизм, геморрой, подагранан көслө дауа ул.

...Үлергә яткайны инде Аҡтүш тигән этебеҙ. Һуңғы көндәрендә, исмаһам, үҙ иркендә йөрөһөн, тип, сылбырынан ысҡындырғайныҡ... ҡайҙалыр юҡ булды. "Ҡырға китеп үлә ул эт менән бесәй", тинеләр. Шулай, хушлашып бөткәйнек инде. Ә ул үҙе генә белгән "шифахана"һынан шәбәйеп ҡайтып килде! Әле лә йәшәп ята. Ваҡыт-ваҡыты менән баҡсаға аҡтамыр ашарға инеп сыҡҡанын күрәкүҙәтә йөрөйөм.

### Тормош һабаҡтары

Байтаҡ йылдар аҙ ҡанлылыҡтан яфаландым. Дауаханаларҙы тапау, оҙаҡ-оҙаҡ дауаланыуар әллә ни фәтүә бирмәй ине. Иң аптыратҡаны, гемоглобин кәмегән һайын, тамаҡҡа аш бармай. Үҙәккә үтте инде. Йәшермәйем, эстән генә "Ниңә мин?" тип, яҙмышҡа үпкәләгән саҡтарым әҙ булманы... Шулай ҙа, сыға алдым алдына сирҙең...

Көнбайыш һәм көнсығыш медицинаһы тураһында китаптар ҡулға килеп эләкте. Был ике төрлө медицина йүнәлешенең төп айырмаһы шунда: көнбайыш - сир менән, йәғни симптомдар менән көрәшә; көнсығыш сирҙең сәбәбен асыҡлай һәм организмдың үҙкөйләнешен тергеҙә. Көнбайыш сирҙе бикләп ҡуя, нәҡ әкиәттәгесә енде шешәгә ҡыуып кереткән кеүек. Тик уның ҡасан тағы ысҡынырын ғына белмәйһең. Көнбайыш медицинаһы айырым ағзаны ғына дауалай...Көнсығыш кешене бер бөтөн итеп ҡарай. Һәр сир - организм көйләнешенең боҙолоуы, тороҡлолоҡ хәленән ситкә тайпылыу тип һанай. Дауаны көйләнеште тергеҙеү зарурлығынан сығып билдәләй.

Көнсығыш рәсми медицинаны инҡар итмәй. Киреһенсә, бер-береһен тулыландырып, сирле кеше мәнфәғәтендә эш итә. Көнбайыш өсөн был бизнес өлкәһе, баҙар...

### Аҙыҡ дауалай...

Ҡан эшләнеү факторҙары күп. Шуға анемияның сәбәптәре лә етерлек. Ҡан беҙ нимә ашайбыҙ, шунан эшләнә. Күп осраҡта туҡланыуҙы көйләп кенә лә һауығып була.Был бигерәк тә йөклө ҡатындарға, йәш балалы әсәйҙәргә, балаларға, операция үткәргәндәргә, ғүмере буйы аҙ ҡанлылыҡтан яфаланғандарға ҡағыла.

**Ошо ысулдарҙы ҡулланырға кәңәш итәм:**

№1. Һурпа. Итте йоҡа ғына киҫемдәргә ҡырҡып, өҫтөнә сығырлыҡ ҡына һалҡын һыу ҡояһың. Ун-ун биш минут ҡайнағас, һурпаны ҡоротлап эсәһең. Укроп өҫтәргә мөмкин. Самаһы - 0,5-1 л һыуға 100 г ит. Артабан һыу өҫтәп, ашты бешереп ҡуяһың.

№2. Бауыр. Ит бешергәндәге кеүек бешерәһең. Самаһы -100 г бауырға 0,5л һыу. Һурпаһын эсеп, бауырҙы ашап ҡуялар (кемдер яратмаһа, көсләп ашамаһын).

№3. Ҡарабойҙай буҡтаһы. Эмаль, суйын йәки балсыҡ һауытта бешерәләр. Бер стакан ярмаға 1,5 стакан ҡайнар һыу иҫәбенән.Быуы сыҡмаҫлыҡ ҡапҡас кәрәк. Ҡайнап сыҡҡас, 5-7 минуттан уттан алаһың. Ярты сәғәт үҙ быуында ултыра.

№4. Кефир, ҡатыҡ, эремсек, ҡорот. Улар органик кальций тоҙҙарына бай. Кальций етешмәһә, гемоглобин өсөн кәрәк булған тимер үҙләштерелмәй. Анемиянан яфаланыусылар юҡҡа ғына аҡбур, балсыҡ, эзбиз көҫәп йөрөмәй. Көнөнә 1-3 стакан кефир, 50-100г эремсек йәки ҡорот - үҙе ҙур дауа.

№5. Шифалы сәй: а) сәй бешергәндә сәйнүккә 5-6 ҡыҙыл клевер сәскәһе ҡушып һалаһың; б) икенсегә - 3-5 ҡарағат япрағы; в) өсөнсөһөндә 3-5 кесерткән япрағы һалырға була.

№6. Салат: а) сей кишерҙән - ҡаймаҡ йәки үҫемлек майы ҡушып; б) алма, ҡарағат, турғай еләге, шартый еләге, көртмәленән - кефир менән бутап; в) ҡара емеш (чернослив) һәм ҡыҙыл сөгөлдөрҙән салат.

№7. Яңы ғына йыйып алынған йәки туңдырылған емештәр. Көн буйына 2-3 сәғәт һайын ҡалаҡлап ашай йөрөйһөң.

№8. Күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм, грек сәтләүеге, лимон һәм балды барыһын бергә турағыстан үткәреп, тигеҙ нисбәттә ҡушып бутайһың. Сәйгә ҡушып эсергә йәки иртән, төш, кис берәр ҡалаҡлап ашайһың.

№9. Әлморондан (гөлйемеш) компот. Бер ҡалаҡ емеште 0,5л һыуға һалып ҡайнатаһың.

№10. Ҡан яһаусы сәй. Ҡарағат, турғай еләге, шартый еләге, көртмәле, әлморон, боланут (иван-чай), кесерткән, ҡыҙыл клевер сәскәләрен өс көн бәҫәрткәндән һуң, турағыстан үткәреп, бик эҫе булмаған (70-100°С) духовкала киптереп алалар.

№11. Ҡан яһаусы бәлзәм:

1.Турғай еләге (үләне, емеше)

2. Шартый (үләне, емеше)

3.Әлморон (сәскәһе,үләне, емеше)

4.Боланут (сәскә төймәсеге, япрағы)

5.Кесерткән (япрағы)

6. Клевер (сәскәләре)

7.Ҡандала үләне (сәскәләре, япрағы)

8. Ҡайын(йәш япраҡтары)

9. Көртмәле(үләне, емеше)

10. Бал

Компоненттар тигеҙ нисбәттә алына. 0,7 л банкаға 0,5-әр л күләмдә ҡатышма һәм 40°-лы спирт (үҫемлек майы менән дә эшләп була) ҡоялар. Балғалаҡлап, көнөнә 3-5-7 мәртәбә эсәләр.

№12 " Анемия" ҡатнашмаһы

1.Ҡыҙыл клевер (сәскәһе)

2.Кесерткән (япрағы)

3.Турғай еләге (сәскә, япрағы)

4.Боланут (сәскә, япрағы)

5.Әлморон (сәскә, япрағы)

6. Ҡандала үләне(сәскә, япрағы)

7. Ҡарағат(емеше)

8. Ҡара көртмәле (сәскә, емеше, япрағы)

9.Ҡара мышар (сәскә, япрағы, емеше)

10.Миләш (сәскә, емеше, япрағы)

12. Ағас еләге(сәскә, емеше, япрағы)

13. Ҡара ағас еләге (сәскә, емеше, япрағы)

14.Йүкә (сәскә, япрағы)

Аҙыҡ: ит, бауыр, ҡарабойҙай, күрәгә, айва, һырғанаҡ, алма, гранат, сыр, эремсек, ҡорот, кефир, ҡатыҡ, эркеттән айран, ҡымыҙ, миндаль, диңгеҙ кәбәҫтәһе, ҡарағат, ҡыҙыл сөгөлдөр, балан, кишер, ҡара торма, йөҙөм, шартый, турғай еләге, көртмәле, инжир.

### Дауаланыу схемаһы

**1-се курс (10 көн)**

№1 һәм №2 көн аралаш бер мәртәбә.

№3. Ҡарабойҙай буҡтаһы.

№4. Кефир, ҡатыҡ,эремсек, ҡорот (ҡайһыныһы бар)

№6.Салат (ҡайһынһыһы бар)

№5. Шифалы сәй

№7. Яңы ғына йыйып алынған йәки туңдырылған емештәр. Көн буй-

ына 2-3 сәғәт һайын ҡалаҡлап (төрләндереп)

№ 8.Күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм, грек сәтләүеге, лимон һәм бал

№10 Ҡан яһаусы сәй

**2-се курс (10 көн)**

№1 һәм №2 көн аралаш бер мәртәбә. Мәсәлән, тәшкәләктә.

№4 .Кефир, ҡатыҡ, эремсек, ҡорот (ҡайһыныһы бар)

№6.Салат (ҡайһыныһы бар, төрләндереп)

№7.Яңы ғына йыйып алынған йәки туңдырылған емештәр. Көн буйына 2-3 сәғәт һайын ҡалаҡлап (төрләндереп)

№ 8.Күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм, грек сәтләүеге, лимон һәм бал

№11. Ҡан яһаусы бәлзәм

**3-сө курс (10 көн)**

№1 һәм №2 көн аралаш бер мәртәбә

№4 .Кефир, ҡатыҡ, эремсек, ҡорот (ҡайһыныһы бар)

№6.Салат (ҡайһыныһы бар)

№7.Яңы ғына йыйып алынған йәки туңдырылған емештәр.Көн буйына 2-3 сәғәт һайын ҡалаҡлап (төрләндереп)

№ 8. Күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм, грек сәтләүеге, лимон һәм бал

№9. Әлморондан (гөлйемеш) компот

№12" Анемия" ҡатышмаһы

Мөмкинлегеңдән сығып, график төҙөп алаһың.Ҡул аҫтында булған компоненттарҙан меню төҙөйһөң. Һанап киткәндәрҙән нимәләр етешеп бөтмәүе ҡурҡыныс түгел. Ошо схема менән дауаланып, күптәр был сир менән күптән хушлашты инде. Беҙеңсә гемоглобины бер ҡасан да 50-60-тан үтмәгәненең 140 булып китте хатта.

### Кеше экологияһы

Ҡайҙалыр ишеттемме, уҡынымме инде, кеше үҙ ғүмеренең яртыһында һаулығын туҙҙыра ла, ҡалғанын һаулыҡ эҙләп үткәрә, тип. Хаҡтыр. Тәмәке һәм араҡыға киткән һаулыҡ һәм аҡсаны әйтәһе лә түгел. Әммә кин далаләрә бик яҡтыртылып бармаған бер өлкә бар. Күптәребеҙ, һаулығына янаған хәүеф - ул эсәр һыуҙарҙың, һулар һауаның бысраныуы тип кенә белә. Зарарлы матдәләрҙең 90 проценты аҙыҡ аша инә тигән иҫкәрмәне әҙәми зат бик ишетмәй, ахыры.

Ни өсөн аҙыҡ тигәнебеҙ ыу булып сыға һуң? Сәбәптәре байтаҡ. Тәүсәбәп - етештереү технологияһында. Күп күләмдә һәм үҙкиммәте түбән продукцияны етештереү өсөн орлоҡтан уңыш алғансы күпме ашлама, ағыулы химикаттар, стимулятор, антибиотиктар ҡулланыла. Йәшәү ҡануны буйынса, һәр тере зат йән аҫырау өсөн нимә менәндер туҡлана һәм икенселәр өсөн үҙе лә аҙыҡ булып тора. Шулай итеп, аҙыҡ сылбыры килеп сыға: үсемлек ашаусы - ит ашаусы. Бөтә зарарлы матдәләр ошо сылбыр аша туплана килеп, аҙаҡҡы торғанына тапшырыла.

Икенсе сәбәп, аҙыҡты эшкәртеү, һаҡлау һәм ҡулланыусыға еткереү юлында. Оҙағыраҡ һаҡланһын, ылыҡтырғыс торошҡа килһен өсөн нимәләр генә ҡулланылмай! Бигерәк тә бешкән аҙыҡҡа бактериоцид матдәләр күп ҡушыла. Һуңғы йылдарҙа (үткән быуаттың 90-сы йылдарынан) тәм биргес һәм буяғыс матдәләр ҡушылған аҙыҡ тәрҙәре күбәйҙе. Шунлыҡтан, тәбиғи аҙыҡ менән ялғанын айырыуы еңел дә түгел. Магазин кәштәләре шундай аҙыҡтан һығыла башлағандан алып ниндәй сирҙәрҙең күбәйеүе медицина үҙәктәре туплаған отчеттарҙа сағылмай ҡалмағандыр бит. Ә ниңә ул мәғлүмәт халыҡҡа еткерелмәй? Бәлки, еткереүҙән ни фәтүә тип һанағандан шулайҙыр. Сөнки экологик яҡтан таҙа етештерелгән аҙыҡ ҡиммәт була. Ҡулланыусыларҙың күбеһе уны һатып ала алмаясаҡ.

Бигерәк тә сит илдән килгән аҙыҡ хәүефле. Күпме ер үтеп килгән бит ул. Шул ваҡыт арауығында нисек боҙолмай, саф килә алһын ти инде ул?

Шулай ҙа ошо көрсөктән сығыу юлдары бар. Ауылда һәр кемдең теләгәнен үҫтереп алырлыҡ ере бар. Үҙенә генә түгел, һатырлыҡ та. Тик ул ҡиммәт буласаҡ! Ситтән килтерелгән "татлы ыу" менән ярыша алмаҫ та! Әммә фекерләүсе кеше аҙыҡҡа яһалған "экономия"ны һаулыҡҡа тотонасағын аңлаһа ине...

Уйымса, һаулығын ҡәҙерләгән кеше, ерлектә етештерелгән аҙыҡҡа өҫтөнлөк бирәсәк. Шәхси хужалыҡта етештерелгәненә! Күҙ күргән, таныш кеше етештергәненә! Ышаныслыһына! Ошо ауылды һаҡлап ҡалыу юлы ла булыр ине ул. Юғиһә, Өсөнсө донъя һуғышы бит был! Ҡоралы бик мәкерле - татлы ыуға төрләгән аҙыҡ! Тәмәке, араҡы, наркотик нимә генә ул уның янында!



**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Аҙағы. Башы 2013 йылдың 50-52-се, быйылғы 2-се һандарҙа).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ҒӘЙБӘТ ҺӨЙЛӘМӘЙЕК

**Һыҙланма, дуҫ, ғәйбәт оҙон телле,**
**Әммә ҡыҫҡа уның ғүмере.**
**Күрмәйһеңме, ғәйбәт ҡапсығының**
**Йөҙө ҡара, биле көм(ө)рө,**
**- тип яҙа Зәйнәп Биишева үҙенең "Һыҙланма, дуҫ", тип аталған шиғырында. Ысынлап та, кемделер сәйнәү, уның етешһеҙлектәре хаҡында һөйләү, тикшереү, йәғни ғәйбәт киң таралған иң ҙур кәмселектәрҙең, боҙоҡлоҡтарҙың, гонаһтарҙың береһе. Ҡайһы берәүҙәр ғәйбәттең насар икәнен белә тороп та, унан ҡотола алмай. Сөнки ул - нәфескә кинәнес килтергән, ялған илһамланыу, дәрт биргән ағыулы ләззәт. Ул имандың зәғиф, йә бөтөнләй булмауы билдәһе.**



Аллаһы Тәғәлә ғәйбәт тураһында Ҡөрьән Кәримдә: "Әй, иманлы кешеләр! Уйҙырмаларҙың *(ғәйбәт, имеш-мимештәрҙең)* күбеһенән ваз кисегеҙ. Уларҙың байтағы гонаһ. Кешенең серен һатмағыҙ, шымсылыҡ ҡылып, бер-берегеҙҙең ғәйебен *(тырнаҡ аҫтынан кер)* эҙләмәгеҙ. Берегеҙ икенсегеҙҙең артынан *(яман)* һөйләп ҡалмаһын. Үлгән туғанының итен ашап, кеше тәм табырмы? Был нәжес бер ғәмәл булыр ине. Шулай булғас, *(был харамдарҙы ҡылып, гонаһҡа батыуҙан)* Аллаһтан ҡурҡығыҙ. Шик юҡтыр, Аллаһ тәүбәләрҙе ҡабул итә һәм ярлыҡай" (49:12), - тип әйтә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәйбәттең аңлатмаһын аныҡ итеп аңлатып ҡалдырған беҙгә. "Беләһегеҙме ғәйбәттең нимә икәнен?" тип һораған ул сәхәбәләренән. "Аллаһ һәм Уның Рәсүле яҡшыраҡ белә", тип яуаплаған улар. "Ғәйбәт - ҡәрҙәшең тураһында уға оҡшамаясаҡ итеп һөйләү (телгә алыу)". Бер кеше: "Әгәр минең әйткәндәрем ул кешелә ысынлап та булһа?" - тип һораған. Аллаһ Рәсүле: "Әгәр ҡәрҙәшеңдә булған (әммә ул был турала һөйләүҙәрен теләмәгән, уға был оҡшамаған) нәмә хаҡында һөйләһәң, һин уның турала ғәйбәт һөйләнең килеп сыға. Ул кешелә булмаған нәмә хаҡында һөйләһәң - ул саҡта уға яла яҡтың тигән һүҙ", - тип яуап биргән.

Ғәйбәт һөйләү менән яла яғыусылар үҙҙәрен ике донъяла ла ҙур ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Кешенең итен ашау сирҡанысмы? Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешене ашаусылар ниндәй оло язаға тарттырыласағын күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Ә бит Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәйбәт һөйләүҙе үлгән кешенең итен ашау менән юҡҡа ғына сағыштырмаған. Шуға күрә, кеше булмағанда уның тураһында, уның тышҡы ҡиәфәте, кейеме, йөҙө, сығышы, тәртибе һ.б хаҡында, ул кеше ишеткәндә оҡшамаясаҡ барлыҡ һүҙҙәрҙән, аңғамаләрҙән, серләшеүҙәрҙән таҙарынырға тырышайыҡ.

Йыш ҡына беҙ үҙебеҙҙең һәр хәрәкәтебеҙ, ҡылығыбыҙ, шул иҫәптән һүҙҙәребеҙҙең фәрештәләр тарафынан яҙылыуын һәм Ҡиәмәт көнөндә үҙебеҙгә ҡаршы ҡулланыласағын онотабыҙ. Ғәйбәт кеше хоҡуҡтарын сикләү менән бәйле гонаһтарҙан һанала. Йәғни, күп гонаһтарҙы эшләп, һуңынан ихлас тәүбәгә килһәң, Аллаһы Тәғәлә уларҙы ғәфү итә. Был осраҡта, Аллаһы Тәғәлә генә түгел, һинең телеңдән, ҡулыңдан, власыңдан зыян күргән кеше шәхсән рәүештә ғәфү итергә тейеш. Әгәр ғәфү итмәһә, ғәйбәтсенең (залимдың, күп кешеләрҙе алдаусының һәм башҡа кешеләрҙең өлөшөнә хаҡһыҙ рәүештә инеүсенең) изге ғәмәлдәре тартып алынасаҡ һәм уның теленән (ҡулынан, власынан) зыян күреүселәргә алып биреләсәк. Ә изге ғәмәлдәре бөткәс, ул теге кешенең гонаһтарын үҙ өҫтөнә аласаҡ. Ғүмер буйы ғибәҙәттәрҙе үтәй килеп тә, Аллаһы Тәғәләгә имандан ситкә китмәйенсә лә, әгәр телеңде, ҡулыңды, тойғоларыңды тыя белмәһәң, бер нәмәһеҙ тороп ҡалыу ҡурҡынысы бар.

Ғәйбәт һатыу, яла яғыу йыш ҡына кеше тойғоларына буйһонмаған ҡылыҡтар ул. Шуға ла кешегә даими рәүештә камиллашыу, үҙ ахлағын яҡшыртыу йүнәлешендә эш алып барырға кәрәк. Шулай уҡ үҙең хаҡында ғәйбәт һөйләүселәрҙе ғәфү итергә, нәсихәтләргә, әммә ләкин улар кимәленә төшөп, яуап итеп, улар хаҡында ғәйбәт һөйләүгә тиклем төшөргә ярамай.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләнә.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Утыҙынсы көн

**"МегаТормош" программаһын тамамлау**

***Шәхси аңың, тәнең һәм характерың өҫтөнән идара итеү буйынса эшмәкәрлектең һуңғы планы***

Тормошоғоҙ менән хакимлыҡ итеүгә өлгәшеүҙең 30 көнлөк программаһын уңышлы тамамлауығыҙ йәһәтенән ҡотлауҙарымды ҡабул итегеҙ. Һеҙгә шәхси камиллыҡҡа һәм тормошта уңышҡа өлгәшеү өсөн Көнсығышта һәм Көнбайышта булдырылған иң нескә алымдар асылды. Меңдәрсә кеше уларҙы ҡулланып, иҫ китмәле шәхси байлыҡҡа, күңел тыныслығына һәм идеаль сәләмәтлеккә эйә булды. Һеҙ ҙә улар кеүек булдыра алаһығыҙ.

"МегаТормош"тоң бөгөнгө һуңғы көнө - һеҙҙең яңы тормошоғоҙҙоң башы. Уҙған 30 көн эсендә фекерләүегеҙҙе һәм тойғоларығыҙҙы контролләүсе ҡеүәтле принциптарҙы һәм һөҙөмтәле күнекмәләрҙе үҙләштерҙегеҙ. Хәҙер инде элеккегә ҡарағанда дәртләрәк, энергиялыраҡ һәм тәртиплерәкһегеҙ. Был яҙмаларҙа тормош уңышының һәм бәхеттең серҙәре ята. Уларҙы үҙегеҙ ҡулланығыҙ һәм башҡаларға ла өйрәтегеҙ. Программаны ҡулланыуҙы туҡтатмағыҙ, киреһенсә, уны тормошоғоҙҙоң әһәмиәтле бер өлөшө итеп алығыҙ. Билдәле спортсы беренсе ярыштан һуң уҡ күнекмәләрен ташламай, ә ошо режим булмышының айырып алғыһыҙ өлөшөнә әйләнгәнсе дауам итә. "МегаТормош" та һеҙҙең тормош рәүешенә әүерелергә тейеш. Һәр көн һеҙ теге йәки был ысулды ҡулланып камиллашасаҡһығыҙ, ә шатлыҡҡа һәм бәхеткә эйә буласаҡһығыҙ. Бәхет - ысынбарлыҡта һуңғы маҡсат түгел, ә ошо һоҡланғыс донъяла сәйәхәт итеү ысулы ул.

Һеҙ күп ваҡытығыҙҙы ошо программа буйынса камиллашыуға сарыф иттегеҙ, ошо юлда бик күп ҡорбандар килтерҙегеҙ. Хәҙер инде йөрәгегеҙ эргәһендә урын алған хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн тейешле кимәлдә ҡоралландығыҙ. Үҙегеҙгә һәм үҙегеҙҙең мөмкинлектәрегеҙгә ышанығыҙ. Барлыҡ сикләүҙәрҙе алып ташлағыҙ һәм һәр саҡырыу ҡабул ителәсәгенә ышанығыҙ.

Юғары маҡсаттар хаҡында хыялланығыҙ. "Йондоҙҙар"ға тинләшегеҙ. Мин һеҙгә уңыштар теләйем һәм ҡасан да булһа бергәләп барған уңыш юлында осраша алыуыбыҙға ышанам. Был юл ысынлап та тулҡынландырғыс, сағыу бүләктәргә бай һәм һәр кем өсөн асыҡ.

Был юл "МегаТормош" тип атала.

**Робин ШАРМА.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АРХАНГЕЛ РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**4-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Әсәҙуллина. Посткриптум. Наваха. Бүрек. Мунса. Ҡайнаға. Фасад. Бикташев. Нукта. Нәҙершина. Тутыя. Старшина. Гоа. Нота. Нур. Ишмырҙин. Батталова. Дегет. Акванавт. Тамға. Тыуа. Ғәзиев. Елпеүес. Нараси. Ғайсин. Назаров. Айыу. Ҡыҙрасов. Темза. Психоз. Ифтира. Ампула. Типи.
**Вертикаль буйынса:** Герб. Ҡаҙғанат. Музей. Руанда. Нишан. Твен. Онғо. Панк. Манара. Астма. Екатерина. Сетка. Сауҡа. Арафат. Уғры. Паша. Бокс. Антарес. Игәт. Интермедиа. Рекс. Кирбес. Идара. Визави. Траш. Килдин. Мотив. Тарткы. Анализ. Роман. Игеҙ. Алашар. Ананас. Тамбов.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Февраль (Рабиғул ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (3) дүшәмбе | 8:35 | 10:05 | 14:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |
| 4 (4) шишәмбе | 8:33 | 10:03 | 14:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 5 (5) шаршамбы | 8:31 | 10:01 | 14:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |
| 6 (6) кесе йома | 8:29 | 9:59 | 14:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 7 (7) йома | 8:27 | 9:57 | 14:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 8 (8) шәмбе | 8:25 | 9:55 | 14:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 9 (9) йәкшәмбе | 8:23 | 9:53 | 14:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

ХОККЕЙ

# ИКЕ ЕҢЕҮ, ИКЕ ЕҢЕЛЕҮ

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы Алыҫ Көнсығыш тарафтарынан ете көнлөк сәфәрҙән ҡайтты. Был сәфәр барышында командабыҙ ике еңеүгә һәм ике еңелеүгә дусар булды.**

Ҡояш ҡалҡҡан төбәктә салауаттар КХЛ чемпионатында иң аҙаҡҡы баҫҡыста килеүсе "Амур"ҙы еңде, шунан һуң турнир таблицаһында урта тирәлә килеүсе Владивостоктың "Адмирал" командаһынан 3:2 иҫәбенә ҡалышты, "Адмирал"дан күпкә алдараҡ барыусы Новосибирскиҙың "Себер"ен буллиттар ярҙамында отто һәм тағы бер иң аҙаҡта һөйрәлеүсе Новокузнецк ҡалаһының "Металлург" хоккей командаһынан отолдо.

Был уйындарҙа башҡалар менән сағыштырғанда ярайһы уҡ юғары баҫҡыста килеүсе "Салауат Юлаев" командаһының арттараҡ килеүе арҡаһында тәү ҡарашҡа көсһеҙ булып күренгән командаларҙан енелеүен дәғүәселәрҙең "батып барғанда, һаламға тотоноғра" тырышыуы, яралы январ һымаҡ, аҡтыҡ көскә көрәшеүе арҡаһында килеп сыҡҡан һөҙөмтә, тип аңларға кәрәктер, моғайын. Бәлки, юлаевсылар ул командаларға юрамал шанс биргәндер. Көсләләр бит сәбәләнеп бармай...

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

КОНКУРС!

# МАЙҘАНҒА!

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралығы, "Кала мәҙәниәт һарайы" муниципаль учреждениеһы һәм Башҡортостан Республикаһының Ҡурайсылар союзы Ҡурайсыларҙың Әҙеһәм ИСКУЖИН исемендәге IV асыҡ ҡала конкурсын үткәрә.**

Конкурс 28 февраль - 1 март көндәрендә Өфө ҡалаһында уҙғарыла. Унда Өфөнөң, республикабыҙҙың район-ҡалаларынан төрлө һөнәр кешеләре ҡатнаша ала. Конкурс 16 йәшкә тиклемге һәм унан өлкән йәштәге ҡурайсылар араһында ике турҙа үтә.

16 йәшкә тиклемге ҡурайсылар 1-се турҙа оҙон көй, марш йә бейеү көйө башҡара. 2-се турҙың шарттары шул килеш ҡала, тик тәүге турҙағы көйҙәр башҡарылырға тейеш түгел.

16 йәштән өлкән ҡурайсылар 1-се турҙа конкурс программаһына ингән бер йырҙы ҡурайҙа уйнай һәм йырлап ишеттерә һәм үҙе теләгән бер көйҙө ҡурайҙа уйнай. 2-се турҙа ҡурайҙа оҙон көй уйнай һәм шул йырҙы башҡара, шулай уҡ үҙе теләгән бер көйҙө ҡурайҙа уйнай.

16 йәштән өлкән ҡатнашыусылар мотлаҡ белергә тейешле көйҙәр: "Урал", "Буранбай", "Бейеш", "Салауат", "Тәфтиләү", "Әрме", "Уйыл", "Ҡаһым түрә", "Колой кантон", "Һыр", "Төйәләҫ", "Ҡуңыр буға", "Зәйнулла", "Ғилмияза", "Кәкүккәй", "Сибай", "Эскадрон", "Сәлимәкәй", "Ғайса ахун", "Һаҡмар". Баһалама комиссияһы мотлаҡ программанан тыш та көйҙәрҙе башҡарыуҙы талап итеүе мөмкин. Конкурста ҡатнашыусыларҙың көйҙәрҙең тарихын белеүе мотлаҡ.

**Анкета-ғаризалар 2014 йылдың 21 февраленә тиклем түбәндәге адрес буйынса ебәрелә:** 450000, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 114/1, Өфө ҡала округы хакимиәтенең сәнғәт һәм мәҙәниәт буйынса идаралығы. Телефоны: 279-06-38, тел./факс: 244-86-04, 279-06-54.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 февраль "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н.Ғәйетбай), комедия
**2 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**6 февраль "Кыҙыҡ был тормош!.."** (В.Шукшин), хикмәттәр
**7 февраль "Нәркәс"** (И.Йомағолов), мелоромантик трагедия
**8 февраль "Хыялый"** (С.Әбүзәр), лирик комедия
**9 февраль "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 февраль "Нух кәмәһе"** (У.Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 14.00
**2 февраль "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 12.00
**4 февраль "Йәләлетдин атай"** (М.Кәрим), уйланыу
**5 февраль "Ромео һәм Джульетта"** (У.Шекспир), драма
**6 февраль "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М.Кәрим), комедия. Башлана 15.00, 19.00
**7 февраль "Алтын балта"** (С.Сурина), әкиәт. Башлана 10.00
**8 февраль "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т.Миннуллин), комедия. Башлана 18.00

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5, 6 февралдә** 19.00 сәғәттә Мәҙәниәт йылын асыу сиктәрендә **филармония артистарының ҙур концерты** һәм Б. Бикбайҙың **"Ҡоҙаса"** музыкаль комедияһы ҡуйыласаҡ.
**7, 19 февралдә** 19.00 сәғәттә Ф.Ғәлимовтың **"Гонаһлы хыялдарым"** комедияһы.

ФЕКЕР ҠОРО

# ИЖАД ҠОМАРЫҢ БУЛМАҺА...

2014 Мәҙәниәт йылы Год культуры

## Сәнғәт кешеләренең Президент менән осрашыуынан

**2014 йылды Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда Мәҙәниәт йылы тип атап, етәкселәр быйылғы йылда үткәреләсәк барлыҡ сараларҙың мәҙәни-тарихи мираҫты һаҡлауға арналасағы тураһында белдергәйне инде. Әммә БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың республика сәнғәт эшмәкәрҙәре менән үткәргән эшлекле осрашыуынан һуң, сәнғәтебеҙ өлкәһендә финанс проблемаларынан тыш, хәл ителеүҙе талап иткән башҡа етди мәсьәләләр юҡ кимәлендә, ахыры, тигән фекер ҡалды.**



Рәсәйҙә Мәҙәниәт йылын үткәреүҙең концепцияһы темаһына арналған Федерация Советындағы һөйләшеүҙә РФ Мәҙәниәт министры Владимир Мединский, йылдың төп бурысы - төбәктәрҙә мәҙәниәтте "уятыу", тип белдерһә лә, республикала мәҙәниәт торошо насарҙарҙан түгел. Рөстәм Хәмитов әйтеүенсә, быйыл да мәҙәниәт өлкәһендә гранттар сәйәсәтен, торлаҡ һәм башҡа мәҙәни объекттар тәҙөү, мәҙәниәт һарайҙарын ремонтлау эшен финанслау дауам итәсәк. Осрашыуҙа ҡатнашыусы сәнғәт әһелдәренең Президентҡа мөрәжәғәте лә башлыса гонорар, торлаҡ, автобустар һорауға ҡайтып ҡалды, тиһәк тә дөрөҫ булыр. Йәмғиәттә яңы идеяларҙы формалаштырыусылар булараҡ, милли интеллигенцияның юғарыраҡ фекер йөрөтөп, милли мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә булған проблемаларҙы яҡтыртыуы урынлы булыр ине һымаҡ та бит. Ләкин... Ижад ҡомарың булмаһа, был бушлыҡты матди етешлек менән генә тултырып буламы икән? Мәҫәлән, Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүсеһенең әле булғанынан да уңайлыраҡ автобусҡа ултырып йөрөргә теләүе, ошо теләген республика башлығына еткереүе барыбер ҙә ҡолаҡҡа ятышлы булманы, сөнки был ансамблдә башҡа проблемалар ҙа барлығы, торлаҡ, йүнле эш хаҡы булмағанлыҡтан, йәш бейеүселәрҙең башҡа ансамблдәргә, хатта сит республикаларға сығып китеүе тураһында ишетә йөрөйбөҙ бит. Һәм тағы. Үткән быуаттың 40-сы йылдарында Рудольф Нуриев "Сыңрау торна" балетында Зәйтүнә Насретдинованың бейеүенә ғашиҡ булып, профессиональ сәнғәт юлын һайлаған. Ләкин ҡайҙа бөгөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында башҡорт спектаклдәре? Ни өсөн театрҙарыбыҙҙағы башҡорт режиссерҙары, режиссер-ҡуйыусылары эшһеҙ, ә яңы спектакль ҡуйҙырыу өсөн "ете диңгеҙ" аръяғынан режиссерҙар "яҙҙыртып" алабыҙ? Ни өсөн республика райондары-ҡалалары буйлап күрше республиканың сәнғәт әһелдәре генә концерт ҡуйып йөрөй? Ә үҙебеҙҙең йырсы-бейеүсе-музыканттар ни менән шөғөлләнә? Ошо хаҡтағы, шулай уҡ ҡайһы бер башҡа мәсьәләләр тураһындағы фекерҙәрҙең дә республика Президенты иғтибары үҙегенә эләгеүе өсөн бик ҡулайлы мәл ине был осрашыу.

Билдәле, ысын сәнғәт бөгөн халҡының мәҙәниәтен күтәреүҙә ғүмеренең төп тәғәйенләнеше, ә халҡына, иленә хеҙмәт итеүҙе - йәшәү рәүеше итеп алған энтузиаст кешеләр иҫәбенә генә үҫешә. Сәсәниә, БДУ-ның Сибай институты уҡытыусыһы Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина, мәҫәлән, халыҡ ижадына - эпос, ҡобайырҙарға дәүләт етәкселеге иғтибарын йүнәлтеп, республика Президент ҡарары менән "Башҡортостандың халыҡ сәсәне" исеме тергеҙелһен ине, тигән теләк белдерҙе. Башҡорт халҡының күп кенә эпостары, ҡобайырҙары бөгөнгә көнгә Мөхәмәтша Буранғоловтың яҙып алыуы арҡаһында килеп еткән. Уға 1944 йылда "БАССР-ҙың халыҡ сәсәне" тигән исем бирелә, тик ул репрессияға эләккәс, был абруйлы исем юҡҡа сығарыла. Сәсәниә иҫәпләүенсә, әлеге мәлдә төрки телле күп кенә халыҡтарҙа сәсәнлек сәнғәте сәскә ата, ә беҙҙә был эшмәкәрлек менән һанаулы ғына кешеләр шөғөлләнә. Был исем тергеҙелһә, сәсәнлек мәктәбен үҫтереү, йәштәргә халыҡ ижадын өйрәтеү эше яйға һалыныр ине.

Милли кинематография өлкәһенә хеҙмәт итеүселәр ҙә үҙ энтузиазмы менән был өлкәне юҡҡа сығыуҙан һаҡлап килә, тип әйтергә була. "Башҡортостан" киностудияһы етәксеһе Азамат Хужахмәтов менән кинорежиссер Булат Йософов быйыл "Аҡбуҙат" милли-этник кино фестивале үткәреү өсөн әҙерләнгән проекттарын Президент грантына тәҡдим итәсәктәрен белдереп, 2010-2013 йылдарға тәғәйенләнгән "Башҡортостан Республикаһында кинематографияны һаҡлау һәм үҫтереү" республика маҡсатлы программаһын оҙайтыу тәҡдиме менән сығыш яһаны.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҙәниәт йылы айҡанлы тағы бер теләк: был йыл баш ҡала кимәлендә генә үтмәһен ине. Бөгөн Өфөлә урынлашҡан төп театр, филармонияларға ҡарағанда, баш ҡаланан ситтә урынлашҡан мәҙәниәт усаҡтары дәүләт ярҙамына күберәк мохтаж. Ауыл клубтары, китапханалары торошо тураһында әйтеп торорға ла түгел, ҡасандыр дәүләт театры исемен йөрөткән һәм оптималләштереү тулҡыны ҡағылғандан һуң Стәрлетамаҡ филармонияһы менән ҡушылып, театр-концерт берекмәһенә әүерелгән театр коллективының бөгөн репетициялар үткәрер залы ла юҡ. Ғөмүмән, мәҙәниәт өлкәһендә фекер алышыр, бәхәс ҡорор мәсьәләләр байтаҡ йыйылған. "Киске Өфө" гәзите бындай фекер алышыуҙарға "йәшел урам" аса, рәхим итегеҙ!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АҘҒАН ИЛДЕҢ БИЛГЕҺЕ...

### бер-береһенә хас булыр

Әҙәплелек билгеһе - эйелеп сәләм биргәне, яҡын итеү билгеһе - кисектермәй килгәне.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер генә кешене аңларға тырышҡансы, дөйөм кешелекте аңларға тырышырға кәрәк.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Ғүмер ҡыҫҡа, сәнғәт юлы оҙон, унайлы осраҡ тиҙ үтеп китеүсән, тәжрибә алдатҡыс, фекер ебен табыу еңел түгел. Шуның өсөн ауырыуҙы дауалауҙа врач үҙе генә түгел, ауырыу үҙе лә, әйләнә-тирәләгеләр ҙә, барлыҡ тышҡы хәл-ваҡиғалар ҙа врачтың эшмәкәрлегенә ярҙам итергә тейеш.

**(Гиппократ).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡуян ағастан-ағасҡа бик етеҙ һикереүсе тейенде осрата ла, һорай ҡуя:**

**- Бер нисек тә аңламайым - һин ҡошмо, йәнлекме?**

**- Ҡош та, йәнлек тә, бер аҙ ғына балыҡ та мин, - тип ғорурланып яуап бирә тейен. - Сөнки мин йәнлектәр ҙә, ҡоштар ҙа, балыҡтар ҙа эшләгәнден барыһын да эшләй беләм: осам, йүгерәм, йөҙәм. Ә һин үҙең ни эшләй беләһең?**

**- Мин йүгерә генә беләм шул... - тип күңелһеҙ генә яуаплаған ҡуян.**

**- Нисек инде, башҡа бер ни ҙә эшләй белмәйһеңме ни? - тип аптырап һораған тейен.**

**- Белмәйем шул, - тигән ҡуян оялып ҡына. Шунан дауам иткән: - Ә һин миңә йүгереп күрһәтмәҫһеңме?**

**- Ҡара һуң! - тигән тейен һәм үләндә алпан-толпан атлап маташҡан.**

**- Ә һин нисек осаһың?- тип ҡыҙыҡһынған бер ҡатлы ҡуян.**

**- Ҡара һуң! - тип, тейен бер ҡыуаҡлыҡтан икенсеһенә һикергән һәм ҡолап төшкән.**

**- Бәлки, һин миңә нисек йөҙөүеңде һәм ағас буйлап үрмәләүеңде лә күрһәтерһең? - тигән ҡуян.**

**- Рәхим ит! - тигән тейен һәм йылғаға төшөп, ҡойроғо менән һелтәнергә тотонған. Ләкин йылға тулҡыны уны шунда уҡ ярға ырғытҡан. Шунан тейен ағас буйлап үрмәләргә маташҡан, ләкин унын да тәүге ботағына тиклем генә барып еткән.**

**- Шунан, һин барыһын да күрҙеңме инде? - тигән бик тәкәббер генә итеп тейен. - Мин ҡош та, кейек тә, балыҡ та! Ә һин, бахыркай, йүгерә генә беләһең...**

**Шулай тигән дә тейен, башын ғорур күтәреп, ҡуян янынан китеп барған. Ҡуян яңғыҙы тороп ҡалғас, шулай уйлаған: "Күп эш белеп, уны насар башҡарыуға ҡарағанда, бер генә эште белеп, уны һәйбәт башҡарыу яҡшыраҡ түгелме икән?.."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5125
Заказ 284